ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

5-11 ғинуар (һыуығай) 2019

№ 1 (835)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

**Улың менән биш йәшенә саҡлы - батша һымаҡ, ун биш йәшкә саҡлы - хеҙмәтсе һымаҡ, ун биш йәштән һуң дуҫ һымаҡ күреп аралаш.**
**(Боронғо һинд аҡылы).**


БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Күршең яҡшы булһа...**
йәнең тыныс та бит

3

**Инглиздәр маҡтаған ҡоралыбыҙ...**

7

**Эшҡыуарлыҡта...**
үҙ урыныңды табыу түгел, унда нығыныу мөһим

8-9

**Ҡабан йылы - ҡабалан...**
өйләнеп йә байып ҡал!

13

**ТВ-программа** 14


ЯҢЫ ЙЫЛ МЕНӘН!

## ҠОТЛАУ ҺҮҘЕ

*Яңы йылда:*
*Өйөң булһын,*
*Үҙеңә хас көйөң булһын,*
*Ут уйнаһын усағыңда,*
*Балаларың - ҡосағыңда,*

*Өҫтәлеңдә йылы ашың,*
*Күңелеңде һалыр эшең,*
*Ҡайтыуыңды көтөп алған*
*Бик ҡәҙерле генә кешең.*

*Бәхет булһын түп-түңәрәк,*
*Әҙәмдәргә күпме кәрәк!*
*Муллыҡта һәм бәрәкәттә,*
*Көн итегеҙ (ә)рәхәттә.*

*Шулай булһын Яңы йылда!*
*Артабан да,*
*Йыл да, йыл да!*

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**



*Лилиә һәм Азат Мәҡсүтовтар ҡыҙҙары Алтынай менән.*

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

# КӘҢӘШЛЕ ЭШ...

## тарҡалмаҫ

**Шәп рубрика асҡан "Киске Өфө". Әйтәһе һүҙҙәребеҙҙе власть вәкилдәренә еткереп ҡалайыҡ, йәмәғәт. Кәңәшле эш тарҡалмаҫ, тигәндәй, фекерҙәребеҙ менән уртаҡлашып, республика тормошон яҡшыртыуға хәлебеҙҙән килгән тиклем булышайыҡ. Власть һәм халыҡ бер-береһен ишетһә, тау кеүек өйөлгән проблемаларҙы йырып сығыу еңелерәк булыр.**

Республикалағы кадрҙар алышыныуын ҙур ҡыҙыҡһыныу менән күҙәтеп барам. Урындарынан бер ҡасан да ҡыбырламаҫ кеүек тойолған "ағайҙар" ҙа үҙҙәренең алмаштырғыһыҙ түгел икәнен аңланы. Сәйәсәт аренаһына йәштәрҙең килеүе ҡыуандыра. Ғөмүмән, алдынғы ҡарашлы, амбициялы, энергияһы ташып торған йәш егет һәм ҡыҙҙарҙы республика власына әүҙемерәк ылыҡтырырға кәрәк. Улар менән яңы фекер, яңы ҡараш, яңы көс килә. "Бер олоно, бер кесене тыңла", тигән халыҡ. Тәжрибәле сәйәсмәндәрҙең ҡулы аҫтында, уларҙың кәңәштәренә ҡолаҡ һалып эшләһәләр, илгә терәк булырҙай сәйәсмәндәр булып өлгөрөп етәсәктәр.

Үҙен борсоған мәсьәләләр тураһында халыҡ хәҙер социаль селтәрҙәр аша ла еткерә. Ләкин әлегә тиклем мин унда башҡорт телендә яҙылған мөрәжәғәттәрҙе күрмәнем. Барыһы ла хатаһыҙ, эҙмә-эҙлелекле итеп урыҫ телендә яҙа белмәй. Тимәк, уларҙың проблемаһы хәл ителмәй ҡалырға мөмкин.

**Шуға күрә, был мөрәжәғәттәрҙе эшкәртеүсе, анализлаусы хеҙмәт башҡорт телендәге текстарҙы ла ҡабул итә башларға һәм ул төркөмдә республиканың дәүләт телен - башҡортса - яҡшы белгән кешеләр ҙә эшләргә тейеш, тип уйлайым.**

СССР тарҡалып, үҙаллы бер нисә дәүләт барлыҡҡа килгәс, әллә күпме кисәге рәсәйле сит ил гражданына әйләнде. Башҡортостанда тыуып үҫеп, ғүмерҙәрен Үзбәкстан, Төркмәнстан һәм башҡа ошондай илдәрҙә үткәргән меңәрләгән милләттәшебеҙ үҙ иленә ҡайтырға хыяллана. Ләкин бөгөнгө көндә улар өсөн тыуған ерҙәренә даими йәшәргә ҡайтыу мәсьәләһе ыңғай хәл ителмәгән. Урындағы хеҙмәттәрҙең тейешле кимәлдә эшләмәүе, кешенең яҙмышына битарафлыҡ күрһәтеүе уларҙың юлында кәртә булып тора. Тап паспорт, миграция эштәре буйынса хеҙмәттең үҙ эштәренә вайымһыҙ ҡарауы һөҙөмтәһендә бөгөнгө көндә әллә күпме кеше гражданлыҡ ала алмайынса яфа сигә. Ошо өлкәлә лә тәртип урынлаштырыу шулай уҡ кисектергеһеҙ эштәрҙең береһе. Һәр кем тыуған яғында йәшәргә һәм үҙен ошо ерҙең хужаһы итеп тойорға ихтыярлы. Ниндәйҙер бюрократик кәртәләр булырға тейеш түгел бындай эштә.

Әлбиттә, күҙгә элер, тиҙ арала хәл итәһе мәсьәләләр быуа быуырлыҡ. Иң мөһиме - республика халҡының мәнфәғәтен ҡайғыртыуға, йәшәү шарттарын яҡшыртыуға йүнәлтелгән эштең ярты юлда туҡтап ҡалмауын теләргә генә ҡала. Халҡы бәхетле булған илдең киләсәге лә ныҡ. Ошоно онотмаҫҡа ине.

**Сәрүәр АҪЫЛБАЕВ.**
**Күмертау ҡалаһы.**

12+

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

# АУЫЛ ХАЛҠЫН ДА... хәстәрләһәләрсе

**Мин ауылда йәшәйем. Бөгөн ауыл халҡын борсоған нәмәләр байтаҡ. Әле бына ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтары буйынса һалынасаҡ түләүҙәр аптыраҭҡайны. Унан алда ғына баҙарҙа һатыласаҡ малды махсус урынға алып барып һуйҙырыуҙы уйлап сығарғайнылар.**

Йәнәһе, был сир таралмауға кәртә булып тора инде. Хәҙер ябай халыҡ баҙарға барып, малын һата алмай, миненсә. Алыпһатарҙарҙы байыта ла ҡуя. Сөнки малды тейәп, район үҙәгенә алып барыу өсөн транспорт кәрәк, кеше яллаһаң, аҡсаң сыға. Махсус мал һуйыу урынында һыйыр малына - 1050, йылҡы малына 2200 һум алалар. Ярай, йылҡы малының эсәген алып сығып була, һыйырҙың эсәген, үпкә-бауырын, тиреһен, башын-тояғын бушлай биреп китәһең. Алам тиһәң, һуйҙырған хаҡына 2 мең ҡушып түләргә кәрәк. Тәрлә рәсми рөхсәт ҡағыҙҙары, ауыл советынан, был һинең малың, тиган справка алыу өсөн тағы түләйһең. Баҙарҙың үҙенә инһәң, һәр кило итенә һатҡан өсөн (һата алыу-алмауыңа ҡарамаҫтан) 10-15 һум күләмендә һалым түләп сығаһың. Һатып алыусы ла белә хәҙер малды махсус урындарҙа һуйҙырғандарын. Улар хәләл итмә, үҙебеҙсә һуйҙырыһәмы, тип һорап аптырата. Бер нәмә лә өндәшмәй генә һатаһың инде. Әйткәндәй, элек малдың башын өтөп, 400 һумға, телен айырым 300 һумға, тояҡтарын 100-130 һумға һатһаң, тирене килоһын 23 һум менән тапшырһаң, бауыр-йөрәген 200-250-гә бирһәң, юл хаҡын ҡаплағандан да артығыраҡ сығарып була ине.

Малды күберәк итеп тотоп, көҙ баҙар-йәрминкә мәлендә һатып аҡса эшләп, шул аҡсаға балалар уҡытабыҙ. Ирем ауыл ерендә эш булмау сәбәпле, эшкә төшә алмай, ситкә китер ине, мин эшләгәс, малды ҡараусы кеше юҡ. Икебеҙ ҙә эшләһәк, балаларға пособие ла, өлкәнебеҙгә социаль стипендия ла юллай алыр инек. Уртансы балабыҙ гимназияла элек ташламалы хаҡҡа туҡлана ине. Собес аша аҙ тәьмин ителгән тигән справка алып була ине. Хәҙер ул справканы алыу өсөн әллә күпме кәртәләр ҡуйҙылар. Әлеге лә баяғы, ата-әсә икеһе лә эшләргә тейеш икән. Унының да МФЦ-ға өсөнсө тапҡыр барғас ҡына саҡ аңланым. Эшһеҙлек буйынса сиратҡа ла ҡуймайҙар мәшғүллек үҙәгендә. Ҡуйһалар ҙа, 1 йыл эш тапмаһаң, тағы ярты йыл эшһеҙ йөрөмәйенсә, ҡабат ҡуймайҙар. Эшһеҙ тип теркәлгән саҡта ла 3 ай үтмәйенсә, МФЦ-ла документтарҙы алмайҙар, закон буйынса, унда һуңғы 3 айҙағы килемең күренергә тейеш икән. Ауыл кешеһе ул пособиеһын да юлламай хәҙер, сөнки юл йөрөп туҙҙырған аҡсаһын да ҡапламай. Бына беҙгә, ябай халыҡҡа һәйбәтләп аңлатһындар ине законарҙы. Күп нәмәне белмәйбеҙ ҙә, һөҙөмтәлә, юлламайбыҙ ҙа, ҡулланмайбыҙ ҙа булып сыға. Ошолар тураһында етәкселәр беләме икән?

Был зарланып ҡына тик ултыра, тимәгеҙ. Мин бар ауыл халҡының проблемаһын яҙам. Ирем, балалар менән тинде тингә ҡушып, машинаһын да, ипотекаға 1 бүлмәле булһа фатир ҙа алдыҡ. Оло улым студент, ҡыҙыбыҙ гимназияла уҡый, Өфөнән ҡайтҡан араларында Темәс баҙарына һөт, ҡорот һатырға ла ебәрәм. Һаулыҡ булһын, тип теләп кенә йөрөйөм, 3 балабыҙҙы ла башлы-күҙле итеп, үҙ өйөбөҙҙә әҙерәк йүнәтеп, матур итеп йәшәргә яҙһын. Һуғыш ветерандары, "Батырлыҡ өсөн" миҙалына лайыҡ булыусы олатайҙарым Ғүмәр Ирназаров менән Хәсән Зөлкәрнәев тыныслыҡ булһын, тип теләп ултыра торғайнылар. Мин дә һуғыш-гәрәсәт булып ҡуймаһын, тип теләйем.

**Альбина БАЙРАҠАЕВА.**
**Баймаҡ районы Үрге Таһир ауылы.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

**"Батька" ҡушаматы алған анархистар атаһы Нестор Махноның ғәскәре данлыҡлы Ҡыҙыл армияға ҡаршы тора алмай, бер-бер артлы еңелеүҙәргә дусар була. Ғәскәр эсендә паника башлана. "Ҡыҙыл машина" "Батька" ғәскәрен илдең бер мөйөшөнә һыйындыра. Анархистар, һаһыҙ яугирҙарын юғалтып, сигенә-сигенә барып, бәләкәй төркөмгә ҡалғас, бер ауылда туҡтап, татлы йоҡоға тала. Махно тоғро ҡатыны, анархия идеологы Агафья Кузьменко (туйҙарынан һуң Галина исемен ала) менән айырым йортҡа урынлаша. Таң һарыһында, йоҡоларының иң татлы мәлендә ауылға ҡыҙылдар көтмәгәндә һөжүм итә. Байтаҡ ҡына затлы мөлкәттәре булһа ла, Нестор пулемет таҫмалары һалынған йәшникте генә үҙе менән алырға өлгөрә.**

# ИЗГЕ ҒӘМӘЛДӘР ҠЫЛАЙЫҠ!

Бына улар үҙҙәренең стихияһы һаналған дала буйлап елдерә. Арттарынан ҡыуа төшкән ҡыҙылдарға ҡаршы Махно күптән һыналған хәйләһен ҡулланырға ҡарар итә. Үҙе һәм ҡатыны ултырған тачанканы башта һыбайлылары ышығында дошман күҙенән йәшереп саба. Быға тиклем дә башҡа бик күп алыштарҙа ул тап ошо ысулы менән дошманын ҡырып, дан яулаған була.

Хәҙер килеп, Котовскийҙың ҡыҙылармеецтары бына-бына Махноның ҡалдыҡ көстәрен ҡыуып еттем, тар-мар иттем генә тигәндә, Несторҙың һыбайлылары ике яҡҡа таралып китеп сабып, "Максим" пулеметы ҡуйылған тачанканы дошманының ҡаҡ маңлайына ҡаршы ҡуясаҡ. Хәҙер-хәҙер пулемет телгә киләсәк тә, ҡыҙылармеецтар киҫелгән ағастай гөрһөлдәп ауасаҡ. Алғы рәттә сабып килеүсе аттар ергә түшәлгәс тә, икенсе рәттә килеүселәре уларға эләгеп, һөрләгәсәк. Мәхшәр ҡубасаҡ. Өсөнсө рәттә килеүселәре инде тиҙ генә аттарының баштарын шаҡарып, табандарын ялтыратасаҡ. Тап шул урында Нестор Махно отряды еңеүен тантана итәсәк, анархистар дәүләте үҙәге Гуляйполела гулять һалдырасаҡ...

...Тап шулай килеп сығырға тейеш ине лә. Нестор тачанка дилбегәһен ҡатынының ҡулына тоттора ла, патрон таҫмалары һалынған йәшниккә үрелә, ҡапҡасын асҡас, асыуынан ҡыскырып ебәрә. Махно берсә ҡатынына, берсә яҫкынып килеүсе ҡыҙылдарға күҙ йүгертә. Ҡатыны Агафья-Галина төндә иренең йоҡлаған сағында йәшниктәге патрон таҫмаларын бушатып, урынына ғәскәрҙең бюджетын тәшкил иткән барлыҡ алтын аҡсаларын, күҙ яуын алырлыҡ гәүһәр-яҡут таштарын тултырған була. Ҡатынының ҡомһоҙлоғо (тик ҡомһоҙлоғомо икән?) арҡаһында анархистарҙың ҡалдыҡ көсөнә, уларҙың атаһы Батька Махноға үлемесле һәләкәт янай. Тағы ла бер нисә секундтан ҡыҙылармеецтар уларҙың өҫтөнә килеп менәсәк. Иҙәсәк. Ер менән тигеҙләйәсәк. Ҡындан ҡылыстар һурыла. Асыуҙан тештәр шығырҙай. Яңаҡтар көсөргәнә...

Шул саҡ Агафья-Галина дилбегәһен үҙен туҡтауһыҙ әрләгән Несторҙың ҡулына тоттора ла, йәшниктәге байлыҡты үксәләренә баҫып килеүсе ҡыҙыл һалдаттарҙың өҫтөнә ташларға тотона. Тәүҙә улар унда-бында ялтыраған алтын-гәүһәргә илтифат итмәй, бер аҙҙан өҫтәренә ниндәй байлыҡ яуғанын аңлап өлгөрә. Бына бер һалдат атының башын ҡайырып, ергә төшөп һибелеп ятҡан байлыҡты йыйырға тотона, уға икенсеһе, өсөнсөһө ҡушыла. Күҙ асып-йомған арала ҡыҙылармеецтарҙың барыһы ла эйәрҙәренән төшә. Алтын-гәүһәрҙәр уларҙың аңын юя, зиһенен томалай...

Өмөттәрен бөтөнләй юйған "анархия дәүләте" һуғышсылары шулай ҡотолоп ҡала. Бер аҙҙан уларҙың күбеһе сит илгә китә. Нестор Махно иһә 1934 йылда Парижда эмиграцияла үлә.

...Иҫке йыл менән хушлашҡанда, Яңы йылға аяҡ баҫҡанда бигүк яҡшы булмаған даны менән тарихҡа инеп ҡалған анархистар атаһы Нестор Махноны ни өсөн иҫкә алдым һуң? Эйе, артыңдан баҫтырып килгән әжәлде алтын-гәүһәр, донъя байлығы - дуңғыҙ ҡаны менән тамаҡландырып, иҫән ҡалып та, илеңдән сит тарафҡа ҡасып китеп тә булалыр, бәлки. Ә бына Иҫке йылда яһалған хаталарыңдан, яҙыҡтарыңдан, холҡоңдағы кире һыҙаттарҙан ниндәй хаҡтар түләп ҡотолорһоң икән? Был мөмкинме? Нәфселәреңдең тамағын матди байлыҡ менән туйҙырып буламы? Әгәр ҙә улар артыңдан ҡалышмаһа, Иҫке йылыңда ятып ҡалмаһа, Яңы йылға аяҡ баҫыуыңдың фөтүәһе бармы? Улайһа, йәшәүҙең мәғәнәһе бөтөнләй юҡмы ни? Әгәр ҙә үткәнеңә пистолет менән атһаң, ул һинә пушка менән яуап ҡайтарасаҡ. Шуға күрә, йәшнигеңдәге патрондарың да ярҙам итмәйәсәк. Ни эшләргә һуң?

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**"Ҡайҙа барма, шунда эйәрә һинең ҡара һаҡалың", тиҙәр. Кеше "Ҡана, мин яҡшы булайым әле", тип, үҙлегенән ҡапыл ғына ҡотола ла алмай. Ваҡытлыса ҡотолған хәлдә лә, экстремаль ситуацияла барыбер үҙеңдең ролеңдә тик үҙең башҡарасаҡһың. Ысынлап та, бәлки, күңелһеҙ үткәнеңдән, хаталарыңдан, иҫке сабаталы холҡоңдан бер нисек тә ҡотолоп та булмайҙыр. Хатта алтын-көмөш, гәүһәр-яҡуттар түләп тә...**

**Шулай ҙа уларҙан арыныуҙың берҙән-бер юлы бар тип тә уйланыла. Ул да булһа - изге ғәмәлдәр ҡылыу. Был осраҡта үткәндәге хаталарың, яҙыҡтарың, әлеге ҡыҙылармеецтар һымаҡ, Иҫке йылдың ҡалған байлыҡтарына ҡыҙығып, 2018-ҙә тороп ҡалыр. Яңы йыл сәғәттәре һуҡҡанда буш шешә кеүек дыңҡылдап, Иҫке йылда ятып ҡалыр. Холҡоңдағы кире сифаттарыңа Яңы йылда "ашарға" бирмәһәң, уларҙы туйындырмаһаң, 40 көн үтеүгә, улар һыңғырашып йән бирәсәк...**

**Изге ғәмәлдәр ҡылайыҡ!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостандың медицина ойошмалары республика бюджеты иҫәбенә тағы 35 ашығыс ярҙам машинаһына эйә булды. Был хаҡта республика һаулыҡ һаҡлау министрлығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итә. Бынан алда республиканың башҡа ҡала һәм район дауаханаларына 23 ашығыс медицина ярҙамы автомобиле оҙатылғайны. Республика Хөкүмәтенән бөтәһе 172 ашығыс ярҙам автомобилен һатып алыу өсөн аҡса бүленгән.

✓Республиканың Өфө районындағы "Яңы Булгаков" торлаҡ комплексын төҙөүсе 8А, 32А, 16Б һәм 17Б йорттары өлөшсөләренә күптән көткән фатир асҡыстарын тапшырҙы. 25 декабрҙә төҙөүсе күп фатирлы йортто сафҡа индереүгә рөхсәт алды. Әле бер юлы 108 ғаилә фатирлы булды. 2018 йылдан Өфөлә, Өфө районында, Салауатта һәм Нефтекамала бөтәһе 19 йорт проблемалылар исемлегенән алынды. Дөйөм алғанда, 899 кеше фатирлы булды.

✓Башҡортостан милли проекты тормошҡа ашырыу буйынса пилот төбәге статусына дәғүә итеүе мөмкин. "Рәсәйҙә ауыл биләмәләрен үҫтереүгә махсус иғтибар бирергә кәрәк, был өлкә айырым милли проект булыуы мөмкин", - тине Рәсәй Хөкүмәте вице-премьеры Алексей Гордеев "Берҙәм Рәсәй" партияһы съезында ауылды үҫтереү мәсьәләләренә арналған фекер алышыу майҙансығында.

✓Яңы йыл байрамдарында баш ҡалабыҙҙа ВДНХ-Экспола урынлашҡан "Рәсәй - Минең тарихым" паркы 2 ғинуарҙан 8-енә тиклем эшләй. Ҡунаҡтарҙы "Союзмультфильм" киностудияһы йәнһүрәттәрен, "Ёлки" һәм "Время первых" фильмдарын бушлай ҡарау, шулай уҡ парк экспозицияларында мауыҡтырғыс экскурсиялар көтә. Ҡышҡы каникулдар осоронда 18 йәшкәсә барлыҡ уҡыусыларға һәм студенттарға парк залдарына инеү бушлай. Акция 2019 йылдың 14 ғинуарынаса дауам итә, тип хәбәр иттеләр Тарихи парк хакимиәтенән.

✓Рәсәй Федерацияһының Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы кодексына төҙәтмәләргә ярашлы, әгәр почта аша заказлы хат менән ебәрелгән ҡарарҙың күсермәһе һуңлап килһә, штрафты 50 процент ташлама менән түләргә мөмкин булған егерме көндөң ваҡыты оҙайтыла. Законда льготалы осорҙо тергеҙеү өсөн кешегә нимә эшләргә кәрәклеге анығлана.Бынан алда Рәсәй Хөкүмәте Дәүләт думаһына ЮХХДИ штрафын 20 көндә түләүҙе оҙайтыу тураһында закон проектын индергәйне.

БЫЛ АЙҘА...

# КҮРШЕҢ ЯҠШЫ БУЛҺА...

## йәнең тыныс та бит



**Ҡыш уртаһы - йыл башы ғинуар ҙа килеп етте. Фенологтар фекеренсә, ул ҡышҡы айҙар араһында иң тотороҡлоһо, ҡарлыһы. Шуғалыр ҙа Бөтөн донъя күләмендә Ҡар бабай (18) менән Ҡар (20) көндәре тап ошо айҙа билдәләнә.**

Ҡар көнө тигәндәре календарҙа яңыраҡ ҡына (2012 йылдан) һәм йәштәрҙе, балаларҙы ҡышҡы спорт төрҙәренә йәлеп итеү маҡсатында булдырылһа ла, атмосфера күренеше булараҡ ҡарҙың әһәмиәте, белеүебеҙсә, быны менән генә бөтмәй. Ҡар, ямғыр кеүек үк, киләһе уныш нигеҙе лә. Бынан тыш, ул кешелеккә ер йөҙөндәге климат торошон, уның тәбиғәтен аңғартыусы һизгер "барометр" ҙа. Һуңғы йылдарҙа бындай төр яуым-төшөм ят булған илдәрҙе лә хатта әленән-әле ҡар басып китеүе, үҙебеҙҙә ҡоторонған ҡуҙ аҫҡыһыҙ бурандар йә булмаһа ҡыштың декабргә тиклем көттөрөп кенә килеүе планеталағы климат көрсөгәнөң тупһабыҙға аяҡ баҫып тороуына ишара.

Әйткәндәй, циклон һәм антициклондар климат картаһында ғына сыуалышмай, сәйәси карта ла тотош көрсөк даулы ҡамауында ҡалды бөгөн. Дини ҡараштағы ҡайһы бер эксперттар тәүгеһендә ошо һуңғыһының касафатын да күрә: юғары көс кешелек донъяһының бына-бына сығырҙан сығыр яһиллығына язаһын ебәрә, иҫкәртә, имеш. Ләкин донъя аренаһы иҫкәртеүҙе аңғарыр хәлдә түгел инде күптән. Яһиллыҡ йомғағы, таҙан тәгәрәгән ҡар тубылай, ҙурайғандан-ҙурая ғына бара. Ҡайһы бер сәйәси күҙәтеүселәр әйтеүенсә, бөгөнгө халыҡ-ара ситуация Беренсе донъя һуғышы алдынан булған хәлдәрҙә хәтерләтә икән. "Өсөнсө донъя һуғышы алдында торабыҙ", тип хафаланыусылар ҙа күп. Исеме яңъял ҡуптарыу, нацизм идеяһы символына әйләнгән Порошенконың НАТО һөслөтеүҙәре буйынса һәм нисек тә артабан да власть башында ҡалыу маҡсатынан Рәсәй сиген боҙоуға һәм Украинала - һуғыш хәле, ә Рәсәйгә ҡаршы һуғыш иғлан итеү кеүек сараһыҙҙан истерикаға бирелеүҙәре, бер яҡтан, трагикомик фарсты хәтерләтһә лә, икенсе яҡтан, донъя тарихындағы иң фажиғәле, миллион ҡорбандар алып киткән һуғыштарҙың береһе тап ана шундай аңы зәғиф шизофреник арҡаһында килеп сығыуын да онотторға ярамай. Шуға ла айҙың ғына түгел, йылдың тәүге көнө Яңы йыл байрамы менән бер ҡатарҙан **Бөтөн донъя тыныслыҡ көнө** (1) булараҡ та билдәләнә икән, был дата һис ҡасан булмағанса ваҡытлы.

Үкенескә, донъя кимәлендә ябай халыҡ һәм йәмәғәтселектең тыныслыҡ өсөн көрәш маршы ни сәбәптәндер һүрелдe, хәҙер күп мәсьәләләрҙе ил етәкселәре үҙ-ара хәл итеү яғын ҡарай. Әйтәйек, Советтар Союзы менән АҠШ араһында барған "һалҡын һуғыш" осоронда, хәтерләһәгеҙ, тыныслыҡ хаҡына һәм локаль һуғыштарҙы туҡтатыу өсөн йәмәғәтселек, айырым "тыныслыҡ илселәре" - күренекле шәхестәр, балалар эшмәкәрлеге ҡеүәтле көс һәм ниндәйҙер йоғонтоға эйә ине. 1983 йыл ике держава араһындағы "һалҡын һуғыш"тың иң ҡыҙыу осоронда Американан Советтар Союзына килеп төшкән 10 йәшлек Самантаны өлкән быуын хәтерләйҙер әле. Уны "тыныслыҡ күгәрсене" тип атанылар. Һәм, ысынлап та, ул ике ил араһындағы көсөргәнешлекте бер аҙға ғына булһа ла йомшарта алды: Советтар иле һәм Америка халыҡтары бер-береһен яҡшыраҡ белә алды, тыныслыҡтың ике яҡ өсөн дә ҡәҙерле булыуын аңланы, тип яҙҙы ул саҡ матбуғат. Төрлө илдәр халыҡтары ер йөҙөндә тыныслыҡ өсөн девизы менән лозунгтар, флагтар күтәреп, күп һанлы демонстрацияларға сыға ине. Бөгөн ундай сығыштар юҡ, тип әйтерлек. Сыҡһалар ҙа, айырым бер ил эсендәге тәртиптәргә ҡаршы (бензин хаҡы) һәм тормош кимәлен яҡшыртыуҙы талап итеп сығалар. Ә бына бер нисә йыл рәттән Рәсәйҙә генә түгел, башҡа байтаҡ илдәрҙә лә киң ҡолас алған "Үлемһеҙ полк" парадын тап тыныслыҡ өсөн халыҡ ихтыяры тип таныырға булалыр. Тик ул йылына ни бары - бер генә көн. Ә тыныслыҡ өсөн көрәш һәр көн, һәр сәғәт һәм минут - туҡтауһыҙ дауам итергә тейеш, сөнки Америка былай ҙа Рәсәй сиктәрен үҙенең хәрби базалары менән ҡамап алып бара. Өҫтәүенә, әле АҠШ Уртаса һәм яҡын араға ракеталарҙы юҡ итеү буйынса килешеүҙән сығыу менән янай, ә был, В. Путин әйтмешләй, "иң яман эҙемтәләргә" килтереүе ихтимал. Тимәк, Америкаға Европа илдәрендә ракеталар урынлаштырыуға киң юл асылаҫаҡ. Өҫтәүенә, 2021 йылда СНВ-3 (стратегик һөжүм ҡоралланыуы) буйынса килешеү мөҙҙәте лә үтә, һәм уның буйынса ла һөйләшергә йыйыныуҙар юҡ әлегә. Ул осраҡта, тине президент 20 декабрҙәге Матбуғат конференцияһында, "Рәсәйгә үҙ хәүефһеҙлеген тәьмин итергә тура киләсәк. Ә беҙ быны нисек эшләргә кәрәклеген беләбеҙ". Шул уҡ ваҡытта ил етәксеһе бындай ҡоралланыуҙарҙың кешелек цивилизацияһын хәүефле сиккә килтереп терәйәсәген дә аңғартты. Эйе, көсөргәнешле осор, ләкин хәүефтең ике башлы таяҡ икәнен дә аңламай түгелдер бит агрессив күршеләр үҙҙәре лә.

Әйткәндәй, Американың "Ҡоторған эт" ҡушаматы таҡылған Пентагон башлығы, йәғни оборона министры Джеймс Мэттистың отставкаға сығыуы һәм пенсияға китергә йыйыныуы хаҡында белдереүе халыҡ-ара хәлдә бер аҙға булһа ла йомшартмаҫмы? Дональд Трамп менән оборона министрының ҡайһы бер мәсьәләләрҙә ҡараштары тап килмәүе отставкаға төп сәбәбе, тип аңлата эксперттар. "Ҡоторған эт"те кем алмаштырыр? Бирһен Хоҙай, власть башына йүнле кешеләр килә торһон, донъяларыбыҙ йөмләнә барһын ине лә... Ҡыш бабайға ғына өмөт бағларға ҡалды, ахыры, йылымы, ҡайнармы икән уның тыны, йомшаҡмы икән күңеле - иретә алырмы ул боҙҙай ҡатҡан күршеләребеҙ күңелен?

Ғинуар - балалар өсөн генә түгел, эшләп йөрөгән өлкәндәргә лә бил аҙып, ял итеп алыу өсөн форсат. Ҡайһы берәүҙәргә оҙайлы каникулдар оҡшап та етмәй икән, улар эшләүҙән дауам итһен, әйҙә. Ҡалғандар ғаиләләре менән бергәләп ял итһен, саңғы шыуһын, киноға барһын. **Балалар киноһы көнөнә** (8), моғайын, махсус репертуар әҙерләгәндер әле кинотеатрҙар. Һәр хәлдә, яңы йыл алдынан көс, дәрт туплап эшкә һәм уҡыуға тотоноу бер кемгә лә зыян килтермәҫ. Әйткәндәй, ҡыйыуыраҡтар хатта тәбиғәт ҡосағында ял итә ала. **Заповедниктар һәм милли парктар көнө** (11) ана шундай тәбиғәт ҡомарҡлылары биләмәләренә ҡышҡы туристик маршруттар ҙа байтаҡ хәҙер.

Аҡъюлайҙың башҡа иҫтәлекле көндәрен барлағанда, Бөтә донъя "Рәхмәт" көнө иң беренсе булып хәтергә килә. Иҫкә төшкәндә генә түгел, ә һәр көн әйтергә онотмайыҡ бер-беребеҙгә ошо мөғжизәле һүҙҙе. Рәсәй матбуғаты (13), Рәсәйҙәге ҡышлауҫы ҡоштар (15), Балаларҙың уйлап сығарыу (17), Ҡулдан хат яҙыу (23), Рәсәй студенттары (25), Халыҡ-ара интернетһыҙ (28) көндәр һәр береһе үҙенсә ҡыҙыҡлы мәғлүмәт бирә, белем даирәһен, зауыҡты байыта.

**Һыуығайҙа тыуғандар:**

**6** - яҙыусы һәм тәржемәсе, журналист, хәрби хәбәрсе **Али Карнайҙың тыуыуына - 115 йыл** (1904-1943).

**9** - прозаик, шағир, драматург, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты **Баязит Бикбайҙың тыуыуына - 110 йыл** (1909-1968).

**16** - яҙыусы, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, "Ҡыҙыл Йондоҙ", "Почет билдәһе", 1 дәрәжә "Ватан һуғышы" ордендары кавалеры, 1959-1973 йылдарҙа "Ағиҙел" журналы мөхәррире урынбаҫары, РСФСР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре. Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты **Ғәли Ибраһимовтың тыуыуына - 100 йыл** (1919-1989).

**27** - Башҡортостандың халыҡ шағиры, драматург, "Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ", ике тапҡыр "Почет билдәһе" ордендары кавалеры **Рәшит Ниғмәтиҙең тыуыуына - 110 йыл** (1909-1959).

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔ Башҡортостанда Башҡорт теле көнөнә ҡарата флешмоб ойошторолғайны. Валерий Меладзе республикала йәшәүселәрҙе башҡорт телендә байрам менән ҡотлап, шатлыҡ һәм уңыштар теләне. Танылған спортсы һәм Рәсәй сәйәсмәне Джефф Монсон Виктор Цойҙың "Перемен" йырының ҡушымтаһын башҡортса йырлап ишеттерҙе. Журналист Сергей Доренко сараларҙың береһендә башҡортса телмәр тотто. Улар башҡорт теле флешмобы йомғаҡтары буйынса махсус призлар - төлкө бүректәр менән бүләкләнде.

✔ Башҡортостандың энергия һатыу компанияны өҫтәлгән хаҡҡа һалымдың (НДС) 18-ҙән 20 процентҡа тиклем артыуына бәйле, 2019 йылдың 1 ғинуарынан электр энергияһына тарифтың күтәрелеүе тураһында хәбәр итә. Газ плитәләре булған йорттарҙа тариф 5 тингә ҡиммәтләнә - 3,06 һум; электр плитәләре булған өйҙәрҙә өс тингә - 2,14 һум. Ауыл ерендә лә 1киловатт-сәғәт өсөн шундай уҡ хаҡ ҡаралған. Әлеге тарифтар ярты йыл ғәмәлдә була. 1 июлдән ставкалар йәнә үҙгәрә: бер ставкалы тариф буйынса 3,17 һум һәм 2,22 һум.

✔ "Тамыр" балалар-үсмерҙәр телеканалының иң күп һанлы һәм социаль әһәмиәтле проекты - "Сулпылар" республика музыкаль телеконкурсы үҙенең дуҫтарын йыйҙы. Өсөнсө урынға бер юлы өс финалсы: Артур Аҫҡаров (Силәбе), Сәйҙә Гәрәйшина (Өфө), Сәлим Ғәбәйҙуллин (Хәйбулла районы) лайыҡ булды. Жюри икенсе урынды Гөлдәр Аллабирҙинаға (Хәйбулла районы) һәм Илнар Ғилметдинова (Илеш районы) бирҙе. Беренсе урынды Ринат Ғаззалов (Әбйәлил районы) алды, ә конкурста Искәндәр Тазетдинов (Миәкә районы) еңде.

✔ Көньяҡ Уралдың баш ҡалаһында Башҡортостандың Силәбе өлкәһендәге вәкиллеге төбәк башҡорт ҡоролтайы менән берлектә башҡортса шыршы байрамы ойошторҙо. Байрамға ишле, аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙәге балалар һәм олимпиадаларҙа, спорт ярыштарында еңеү яулаған уҡыусылар саҡырылды. Улар Арғаяш, Коншаҡ, Сосновка, Красноармейский районҙарынан һәм Силәбенән килде. "Уларҙың күбеһе был уйынды телевизорҙан ғына күргәне бар, - тип һөйләне урындағы "Уралым" баҫмаһы журналистарына йәмәғәтсе Рәбиға Бикбулатова.

БАШ ҠАЛАМ

# КҮҢЕЛЕМӘ ЯҠЫН ДА...

**Мин Өфөлә тыуҙым һәм ошонда йәшәйем. Эшем буйынса күп илдәргә командировкаларға йөрөйөм, Рәсәйҙең башка төбәктәрендә йыш ҡына ял итәм һәм һәр сәфәрҙән үҙемдең тыуған ҡаламды һағынып ҡайтам.**

Баш ҡала көндән көн ҙурая, халыҡ та арта. Тәҙәләш ныҡ әүҙем бара, ҡалҡып сыҡҡан яңы йорттарҙың, сауҙа үҙәктәренең, ҡунаҡханаларҙың иҫәбе-һаны юҡ. Ләкин, ҡыҙғаныска күрә, ул йорттарҙан уртаса йәшәгән Өфө кешеһенең фатир алырға хәленән килмәй, сөнки хаҡтары яҡын барырлыҡ түгел. Шуға күрә социаль торлаҡ төҙәү мәсьәләһен бер нисек хәл иткәндә, әллә күпме кеше үҙенең йортонда йәшәү мөмкинлеге алыр ине. Шулай уҡ торлаҡҡа бәйле төрлө дәүләт программаларының тик 35 йәшкә тиклем генә эшләүен бер нисек тә аңлатып булмай. Оҙаҡ йылдар буйы сиратта тора ла йәштәр, инде еттем, тигәндә, йәше тулыу сәбәпле төшөп тә ҡала. Ғәҙелһеҙлек был, минә ҡалһа. Был хәл рсепубликаның бөтә район һәм ҡалаларында ла күҙәтелә, ләкин Өфө өсөн айырыуса актуаль.

Яңы өйҙәр тапшырыла, ләкин уларҙың алдында автомобиль ҡуйырлыҡ урындар етмәй. Бер үк урында бер-береһенә терәлешеп еңел машиналар тора, шуңда уҡ балалар майҙансығы, алыҫ та түгел сүп-сар һауыттары. Төҙәләш өсөн ерҙең һәр бер кисҙеген ҡулланырға тырышыуҙарын аңлайым, ләкин унда һуңынан йәшәүселәрҙең уңайлығы тураһында ла уйларға кәрәк. Шуға күрә йорт алдында һыйҙырышлы автомобиль ҡуйыу урыны булмайынса, комиссия уны ҡабул итеп алмаҫҡа тейештер, тигән фекерҙәмен.

Аҙым һайын асылған сауҙа-ял итеү комплекстары Өфө өсөн шул тиклем кәрәкме, тигән һорау тыуа. Улары ла бит, ҡараһаң, яртылаш буш тора. Балалар һәм үсмерҙәр бушлай шөғөлләнә алһын өсөн спорт мәктәптәре төҙәү, төрлө түңәрәктәр буйынса дәрестәр алып барыу, сит телдәрҙе өйрәнергә мөмкинлек биргән комплекстар булдырыу урынлыраҡ булмаҫмы, тигән һорау тыуа. Үҙенең күңеле тартҡан түңәрәктәргә йөрөгән бала үҫешкән, зирәк, сос булып үҫә. Ләкин бөтә ата-әсәләрҙең дә аҡса түләп йөрөтөрлөк мөмкинлеге юҡ. Ә спортка, сәнғәткә ылығып үҫеү насар компанияларға эләгеүҙән һаҡлауҫы сараларҙың береһе булып тора икәнен онотмаҫҡа ине ололарға.

Өфөлә автомобилселәр йәйәүлеләрҙе ихтирам итмәй. Юлда йәйәүлеләр сығыу өсөн махсус урындар алдында туктау күптәр өсөн ят. Шулай уҡ светофорҙа улар өсөн ҡыҙыл янһа ла, тиҙерәк үтеп ҡалырға тырышып, хәүеф тыуҙыралар. Шул уҡ ваҡытта йәйәүлеләр ҙә "шәп". Ҡайҙан теләйҙәр, шул ерҙән юлды сығып китеү улар өсөн бер ни ҙә түгел. Хатта бәләкәс балаларын етәкләп, йә санаға йәки коляскаға ултыртып, машиналар геүләп торған юлда алан-йолан ҡарап тороусылар йыш осрай. Шуға күрә юл хәүефһеҙлеге хеҙмәткәрҙәре юл ҡағиҙәһен боҙған йәйәүлеләргә лә штраф һалһын ине.

Тағы ла мине баш ҡалала автобустарҙа йөрөү хаҡының сәғәтенә ҡарап үҙгәреүе ныҡ аптырата. Ни өсөн киске 8-ҙән ул кинәт кенә 30 һумға менеп китеүен бер нисә водителдән һораным, бер кем дә анығ ҡына әйтә алманы. Үҙҙәре лә аптырап йөрөй, күрәһең? Киске сәғәттәрҙә ҡапыл ғына ағыулыктың хаҡы күтәрелмәй ҙә инде.

Өфөлә студент булыу өсөн бөтә шарттар ҙа тыуҙырылған. Урта махсус уҡыу йорттары ла бихисап, төрлө йүнәлеш буйынса юғары белем алырға теләүселәргә лә юлдар асыҡ, ятаҡтар ҙа етерлек. Шул уҡ ваҡытта балалар баҡсалары етешмәй, мәктәптәрҙә икешәр смена уҡыйҙар. Ошо мәсьәләләр яҡын киләсәктә ыңғай хәл ителеренә өмөт бар.

Өфө матур, заманса стилдәге йорттар менән бер рәттән, үткән һәм унан алдағы быуаттарҙа төҙелгән биналарҙы ла күрергә була. Тарих менән бөгөнгө йәнәшә атлауы менән дә күңелемә яҡын баш ҡалабыҙ.

**Артур ФАЗЛЕТДИНОВ.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН



# ИҒТИБАР - ИРЕКМӘНГӘ

**Башҡортостан Республикаһы Башлығы вазифаһын башҡарыусы Радий Хәбиров Рәсәй Дәүләт советының коммерция булмаған ойошмаларҙың ирекмәнлек һәм социаль йүнәлештәге үҫештәренә арналған ултырышында ҡатнашты.**

Ултырышта Ирекмәндәр һәм волонтерҙар йылына йомғаҡ яһалды, был хәрәкәттең артабанғы үҫешенә ҡағылышлы пландар ҡаралды һәм коммерция булмаған ойошмаларҙың социаль йүнәлешен үҫтереү тураһында әйтелде. Рәсәй Президенты Владимир Путин ирекмәнлек хәрәкәте үҫешенә артабан да булышлыҡ итәсәкбеҙ, тип билдәләне. Ил Хөкүмәте тарафынан 2025 йылға тиклем ирекмәнлек һәм волонтерлыкты үҫтереү Концепцияһы билдәләнгән. Стратегик инициативалар агентлығы тарафынан әҙерләнгән федераль һәм региональ кимәлдәге волонтерлыҡты яҡлау буйынса стандарттар билдәләнәсәк. Унан тыш, волонтерлыҡ, шул иҫәптән корпоратив үҙәктәрҙе булдырыуҙы әүҙемләштерергә кәрәк, тине ил башлығы. Шулай уҡ ул төбәктәрҙәге коммерция нигеҙендә булмаған ойошмалар тәҡдим иткән проекттарҙы грантттар ярҙамында тормошҡа ашырыуҙы киңәйтеү мөһимлеген билдәләне.

# ӘҮҘЕМЕРӘК БУЛАЙЫҠ!

**Йыл һуңында Башҡортостан Хөкүмәтендә үткәргән оператив кәңәшмәлә республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров көн ҡаҙағында торған мәсьәләләргә күсерҙән алда, Рәсәй Федерацияһының Дәүләт советында уҙған Ирекмәнлек йылына бағышланған ултырыш йомғаҡтары менән таныштырҙы һәм Башҡортостанда волонтерҙар ойошмаларына ярҙам күрһәтеү мөһимлеген билдәләне.**

- Республикала ирекмәндәр хәрәкәте бик әүҙем эшләй, - тип белдерҙе ул. - Беҙ яҡшы һәм изге башланғыстарыбыҙҙы күтәреп алыуҙа етди ярҙам күрһәтергә әҙер битараф булмаған кешеләрҙең күп менлә армияһына эйә. Шуға күрә, ирекмәнлек йылы менән генә сикләнмәйенсә, был йүнәлешкә етди иғтибар һәм ихтирам менән ҡарарға кәрәк.

Артабан алдағы кәңәшмәләрҙә ҡуйылған бурыстарҙың үтәлеше тикшерелде. Бөгөн төп мәсьәләләрҙең береһе булып урамдарҙы яҡтыртыу тора. Әлеге ваҡытта бығаса яҡтыртыу сығанаҡтары булмаған 51 торак пунктында 2225 сығанаҡ монтажланған. 8,5 мең боҙоҡ яҡтыртыу сараһының эше тергеҙелгән. 408 мәктәпкә инеү урынында 500 метр радиус арауығы яҡтыртылған (89 процент). Бынан тыш, 10 февралгә тиклем тағы ла 40 ҙур һәм бәләкәй ауылда 1000 сығанаҡ ҡуйыласаҡ. Яңы йылдан 6 йылға иҫәпләнгән ауылдарҙы яҡтыртыуҙы яҡшыртыу буйынса программа тормошҡа ашырыла башлаясаҡ.

Кәңәшмәлә төбәктә милек һалымын йыйыу барышына ла иғтибар бүленде. Муниципалитеттар етәкселәре транспорт, ер һәм физик шәхестәрҙән милек һалымы йыйыу кимәлен күтәреү өсөн өҫтәмә саралар күрә, шулай уҡ төҙәләш объекттарын Федераль мәғлүмәт адрес системаһына теркәү буйынса эш алып барыла. Был һалым йыйыу күләмен арттырыуға булышлыҡ итәсәк.

Әммә һалым йыйыу менән бер рәттән, республикаға инвестициялар йәлеп итеүҙе лә оноторға ярамай. 15 ноябрҙән алып дөйөм суммаһы 75 миллиард һум тәшкил иткән 19 инвестиция проекты ҡаралған. Әле проекттарҙың алтыһы тормошҡа ашырыла. Шулай уҡ индустриаль, агросәнәғәт парктарын үҫтереү, тышҡы иҡтисади эшмәкәрлекте, инвестиция майҙансыҡтарын үҫтереү мәсьәләләре ҡарала. 2019 йылдың 1-се кварталында тағы ла 36 проектты ҡарау планлаштырылған. Был мәсьәлә буйынса Радий Хәбиров республикала әлегә был йүнәлештә һөҙөмтәле системаның булмауын, ә эштең өҙөплөкһөп алып барылыуын, әҙмәәҙлелек һаҡланмауын белдерҙе. Әйткәндәй, ул киләһе йылдың тағы ла әүҙемерәк үтәсәген, ауыр, әммә ҡыҙыҡ һәм күңелле буласағын һыҙыҡ өҫтөнә алды.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# БЕРӘҮҺЕН ҺАЙЛА

**2019 йылда уҡыусылар Берҙәм дәүләт имтиханын һәм төп дәүләт имтиханын яңы ҡағыҙәләр буйынса тапшыра: Рособрнадзор дәүләт йомғаҡлау аттестацияһын үткәреүҙең яңы тәртибен раҫланы.** Ун беренселәр өсөн иң мөһим үҙгәреш - математика буйынса имтиханда. Әгәр уҙған йылдарҙа сығарылыш уҡыусылары был фәндә база һәм профилле кимәлдәрҙә тапшыра алһа, хәҙер улар берәүҙе генә һайларға тейеш. Шуның менән бергә математиканан Берҙәм дәүләт имтиханында насар билдә алған осраҡта һынауҙы резерв көндәрҙә ҡабаттан биреү өсөн алдан һайланған кимәлде үҙгәртергә мөмкин. Элекке йылдарҙа мәктәп тамамлаусылар вузға уҡырға инеү өсөн профилле математиканы ғына һайлай ала ине. Сит телдәр буйынса имтихандарҙа ла яңылыҡ бар. Киләһе йылда инглиз, немец, француз һәм испан телдәре менән рәттән, уҡыусылар ҡытай телен дә тапшырыу хоҡуғына эйә.Хәҙер информатиканан Берҙәм дәүләт имтиханын ҡағыҙ бланктарҙы ҡулланмайынса, компьютер формаһында бирергә була.

Төп дәүләт имтиханында мөһим үҙгәреш - рус теленән йомғаҡлау әңгәмәһе. Уны уңышлы үтеү дәүләт йомғаҡлау аттестацияһына инеү өсөн төп шарт булып тора. Йомғаҡлау әңгәмәһе февралдең икенсе шаршамбыһында уҙғарыла. "Икеле" билдәһе алған йәки кисерерлек сәбәп буйынса әңгәмәгә килмәгән ҡатнашыусылар өсөн өҫтәмә ваҡыт ҡаралған - марттың икенсе шаршамбыһы һәм майҙың тәүге эш дүшәмбеһе. Ике осраҡта ла ғариза биргәндә имтиханда ҡат-

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✔ 25 февралдән iFly авиакомпанияһы Өфө - Санья (Ҡытай) - Өфө маршруты буйынса чартер рейстарын башҡара башлай. "Өфө" халыҡ-ара аэропортының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, рейстарҙы 2019 йылдың 10 майына тиклем башҡарыу күҙаллана. Башҡортостандың баш ҡалаһынан осоштар аҙнаһына ике тапҡыр: дүшәмбе киске 9-сы 15 минутта һәм йома төнгө 1 тула 5 минутта (урындағы ваҡыт) тормошҡа ашырыла.

✔ Өфөлә 2019 йылдың декабренә Дуҫлыҡ монументы янында Сочи урамы аша ер аҫты йәйәүлеләр үткәүелен төҙәү күҙаллана. Контракттың максималь хаҡы - 140 миллион 599 мең һум, тендер дәүләт һатып алыуҙары сайтында баҫылған. Подрядсыны билдәләү аукционы 2019 йылдың 25 ғинуарында була. Подрядсыға 110 метрлыҡ үткәүел төҙәргә, яҡтыртҡыстар ҡуйырға һәм коммуникацияларҙы күсерергә кәрәк. Проект Өфө бюджетынан финанслана.

✔ Башҡортостандың Ауырғазы районы Талбазы ауылынан 19 йәшлек Рушана Вәлиева Беренсе каналдың "Голос. Перезагрузка" проекты финалына сыҡты. Ярымфиналда ҡыҙ яҡташыбыҙ Земфираның "Аривидерчи" йырын башҡарҙы. Әйткәндәй, Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров социаль селтәрҙә үҙенә яҙылыусыларҙы Рушана өсөн тауыш бирергә саҡырҙы.

✔ Өфөнөң Торлаҡ хужалығы идаралығы автопаркы яңы махсуслаштырылған техника менән тулыланды. Торлаҡсылар ҡарамағына 8 экскаватор-тейәгес һәм 6 бәләкәй габаритлы тейәгес тапшырылды. Уға тиклем автопарҡҡа 14 самосвал машинаһы, 11 еңел автогрейдер, 6 фронталь тейәгес һәм 3 ҡар тейәгес бирелгәйне.

✔ Башҡортостанда төрлө трассаларҙа 1265 яңы юл билдәһе ҡуйылды. Республиканың Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитеты хәбәр итеүенсә, үҙгәрештәр түбәндәге автомобиль юлдарына ҡағылды: Өфө - Инйәр - Белорет (Өфө һәм Ҡырмыҫҡалы райондарында 305 билдә), Өфө - Иглин - Ҡыҙыл Яр - Павловка (Нуриман районында 934 билдә) һәм Белорет - Учалы - Мейәс (Белорет районында 26 билдә).

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# НУҒАЙ ҠАСАБАҺЫНДА

**Шулай уҡ Яңы йыл байрамдары алдынан Өлфәт Мостафин Нуғай ауылының социаль объекттары менән танышты. Тәүге объект -147-се мәктәп булды.**

Был мәктәптең көҙ файҙаланыуға тапшырылған корпустарының дөйөм майҙаны 22,4 мең квадрат метр тәшкил итә. Мәктәп 1,2 мең бала һыйҙырышлы. Бынан тыш, уның беренсе ҡатында мәктәпкәсә төркөмдәр урынлашҡан, һөҙөмтәлә 150 бала балалар баҡсаһына йөрөй башлаған. Нуғай ҡаланың әүҙем үҫешеүсе территорияһы, шуға ла бында социаль инфраструктура үҫеше иң тәүҙә хәл ителә торған мәсьәләләрҙең береһе.

Киләһе объект - Фәриҙә Ҡудашева урамында ҡулайлаштырылған амбулатория. Унда 170 квадрат метр майҙанлыҡ модуль бинала эштәр бара. Амбулаторияла 5-се балалар поликлиникаһының 3 педиатры ҡабул итәсәк. Башҡа белгестәрҙең килеүе лә көтөлә. Әле бинаға электр уты, интернет, телефон бәйләнеше үткәрелгән. Эшмәкәрлекте башлау өсөн документтарҙың әҙер булыуын көтәләр. Өлфәт Мостафин эште 2019 йылдың ғинуар аҙағына тамамлауҙы һораны. Был амбулатория Нуғай халҡының медицина ярҙамы менән тулыһынса тәьмин итмәй, әлбиттә. Шуға ла унда модуль бинанан тыш, 320 урынлыҡ поликлиника төҙөү проекты өҫтөндә эш бара.

Эш сәфәре аҙағында Өлфәт Мостафин 147-се мәктәптең элекке бинаһын ҡараны. Балалар баҡсаларында урындар етмәү сәбәпле, 650-нән ашыу бала сиратта тора. Шуға ла иҫке бинаны ремонтлап, унда балалар баҡсаһы асыу мәсьәләһе ҡуҙғалана. Өлфәт Мансур улы был мәсьәләнең хәл ителешен тиҙләтергә ҡушты. Шулай уҡ яңы балалар баҡсалары төҙөү йөһәтенән эштәрҙе әүҙемләштереү кәрәклеге билдәләнде.

Әйткәндәй, Нуғай эргәһендә зыярат булмай, тип хәбәр итте Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин. Ул Өфө хакимиәтенең ҡала зыяратын булдырыу өсөн Нуғай йүнәлешендәге автомобиль юлы, тимер юлы һәм М-5 "Урал" автомобиль юлы менән сикләнгән биләмәне ҡалдырыуға бәйле фекерен белдерҙе. "Ҡасабала йәшәүселәрҙең фекере беҙҙең өсөн бик мөһим. Башҡарылған проект эштәре һәм санитар-эпидемиология дәүләт экспертизалары, инженер-геологик тикшеренеүҙәре һөҙөмтәләре буйынса ошо участкаԋың зыярат урынлаштырыу өсөн ғәмәлдәге ҡануниәт нормаларына тулыһынса тап килеүенә һәм территориаль йәшәү зоналары сиктәрендә урынлашмауына ҡарамаҫтан, бында зыярат булмай", - тине Өлфәт Мостафин. Уның һүҙҙәренсә, зыярат булдырыу өсөн "Өфөнөң көньяҡ һәм төньяҡ өләшөндәге йорттарҙан алыҫтараҡ урынлашҡан" ер участкаларын һайлау эштәре алып барыла.

# ИҢ ТӘҮҘӘ - БАЛАЛАРҒА

**Яңы йыл байрамдары алдынан Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин махсуслаштырылған Бала йорто тәрбиәләнеүселәрен байрам менән ҡотланы һәм бүләктәр өләште.**

Бала йорто - дауалау-һауыҡтырыу, реабилитация-тәрбиә учреждениеһы. 1996 йылдан үҙәк нервылар системаһы сирҙәре булған балалар өсөн махсуслашҡан. Бында 4 йәшкә тиклемге балалар йәшәй. Уның баш табибы Рида Кадикова әйтеүенсә, һәр тәрбиәләнеүсе өсөн махсус дауалау программаһы төҙөлә. Өлфәт Мансур улы медицина кабинеттары, бассейн, балалар бүлмәләре менән танышты. Унда һәр бүлмә ғәҙәти фатирға оҡшатып эшләнгән - аш бүлмәһе, телевизорлы залы бар. Балаларҙы ошо рәүешле киләсәктә ғаиләлә йәшәүгә күнектерәләр. Ғаиләгә урынлаштырғанда ла ул, ҡыҙ итеп алыуға өҫтөнлөк бирелә. Әгәр ҙә баланы үҙ ата-әсәһенә ҡайтарыу мөмкинлектәре булһа, был саҡта ата-әсәләр менән эш алып барыла.

Әлеге мәлдә Бала йортонда 126 бала тәрбиәләнә. Йыл дауамында 41 бала үҙ ғаиләһенә ҡайтҡан, 33 баланы ул, ҡыҙ итеп алғандар, опека ысулы менән 43 бала ғаиләле булған. 11 бала балалар йорто һәм интернаттарға күсерелгән, уларҙың да берәүһе үҙенә яңы ғаилә тапҡан.

Быйыл был учреждение 75 йыллыҡ юбилейын билдәләй. Өлфәт Мостафин был сараға бүләк вәғәҙә итте - Бала йорто ихатаһында заманса уйын майҙансыһы барлыҡҡа киләсәк. "Бындай йортта бары тик оло йөрәкле кешеләр генә эшләй ала", - тине хакимиәт башлығы һәм бар коллективты Яңы йыл байрамы менән ҡотланы.



нашыу ваҡыты (ваҡытынан алда, төп, өҫтәмә) күрһәтелергә тейеш. Сентябрҙә һынауҙы ҡабаттан тапшырыу өсөн ғариза яҙыу ваҡыты билдәләнгән - имтихандар башланғанға тиклем ике аҙна алдан. Уҙған йылдарҙа мәктәп тамамлаусылар Берҙәм тәүләт имтиханында ҡатнашыуға ғариза биргәндә аттестаттың төп нөсхәһен түгел, ә уның раҫланған күсермәһен күрһәтә ала.

# ПЕНСИЯҢА ӨҪТӘЛӘ...

**1 ғинуарҙан эшләмәгән пенсионерҙарҙың страховка пенсияһы, шул иҫәптән билдәләнгән түләү 7,05% индексациялана.** Рәсәй Пенсия фонды Башҡортостан буйынса бүлексәһенең матбуғат хеҙмәтендә аныҡлыҡ индереүҙәренсә, өҫтәмәнең күләме индивидуаль һәм пенсияның күләменә бәйле. Республика пенсионерҙарына арттырылған түләүҙәрҙе почта элемтәһе ойошмалары яңы йылдың 3 ғинуарынан уҡ тарата башлай. Эшләп йөрөгән пенсионерҙарҙың пенсияһын индексациялау тәртибе үҙгәрмәй. Пенсия эштән киткән осраҡта ғына бөтә индексацияларҙы иҫәпкә алып түләнә башлай. 1 апрелдән эшләгән һәм эшләмәгән хаҡлы ялдағыларға дәүләт тәьминәте буйынса пенсиялар, шулай уҡ социаль пенсиялар 2,4 процентҡа индексациялана. Был Башҡортостандың 98,6 мең пенсионерына ҡағыла. Бер үк ваҡытта күләме социаль пенсияларҙың артыуына бәйле был булған башҡа түләүҙәр ҙә индексациялана. Матди тәьминәттенең дөйөм суммаһы республикалағы йәшәү минимумы дәүмәленән кәмерәк булған бөтә эшләмәгән пенсионерҙар йыл дауамында пенсияға социаль өҫтәмә ала. Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай 2019 йылда пенсияға социаль өҫтәмә билдәләү өсөн пенсионерҙың йәшәү минимумы дәүмәлен 8645 һум күләмендә раҫлаған.

ҠЫҪҠАСА

# ИҪКЕ ЙЫЛДЫ ОҘАТЫП...

✓ **Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин "Бөтә Өфө" ("Вся Уфа") продюсер үҙәгендә булып китте.** Хакимиәттең муниципаль телекомпанияһы рәүешендә 1999 йылдың 5 ноябрендә эш башлаған үҙәктең аудиторияһы 3 миллионға яҡын кеше тәшкил итә. Шулай уҡ IT аша каналды донъяның бөтә төбәктәрендә лә ҡарарға була. Ҡала башлығы аппарат-студия блогы, яңылыҡтар бүлмәһе менән танышты, коллектив менән аралашты. Телеканал оҙаҡламай HD асыҡлыҡтағы юғары форматлы мәғлүмәттәр тапшырыуға күсергә әҙерләнә. Әйткәндәй, ошо көндәрҙә генә билдәле журналист Азамат Әлмөхәмәтов "Бөтә Өфө"ның етәксеһе итеп тәғәйенләнде.

✓ **Өфөлә 2018 йылда "Заманса ҡала мөхитен формалаштырыу" муниципаль программаһы үтәлешенә йомғаҡ яһалды.** Үтеп барған йылда был программаға 331,2 миллион һум аҡса бүленгән. Шуларҙың 270,4 миллион һумы - федераль, 53,2 миллион һумы республика бюджетынан алынған. Халыҡ индергән аҡса күләме 7,6 миллион һум тәшкил иткән. Программа сиктәрендә былтыр 55 йорт ихатабиләмәһен һәм 79 күп фатирлы йортто төҙөкләндереү ҡуҙалланған. Ләкин йыл аҙағына был һандар, ярашлы рәүештә, 61 һәм 87-гә еткән. Йорт ихатаһындағы юлдарға капиталь ремонт үткәреүгә һәм уларҙы киңәйтеүгә, йәйәүлеләр өсөн юлдар һәм тротуарҙар эшләүгә, яҡтыртыу системаһын йүнәтеүгә айырыуса ҙур иғтибар бүленгән. Шулай уҡ ике биләмәлә - "Түлҡын" скверында һәм "Ҡашҡаҙан" паркында төҙөкләндереү эштәре уҙғарылған.

✓ **Баш ҡалала ун йылдан ашыу уҙғарылып килгән "Вьюговей - 2019" Яңы йыл фестивале еңеүселәрен бүләкләү тантанаһы үтте.** Был юлы фестивалдә ҡатнашыу өсөн 170 ғариза ҡабул ителде. "Вьюговей-2018" фестивале "Боҙло ҡала", "Әкиәт геройы" һәм "Киләһе йыл символы" номинацияларында баһаланған "Әкиәти боҙ" һәм "Яңы йыл Өфөһө" конкурстарын үҙ эсенә ала. Фестивалдә сауҙа, туҡланыу һәм халыҡты көнкүреш хеҙмәтләндереү ойошмалары, белем биреү, һаулыҡ һаҡлау, мәҙәниәт, йәштәр сәйәсәте һәм башҡа өлкәләге учреждениелар ҡатнашты.

✓ **Үтеп барған йылдың һуңғы көндәрендә күпләп ҡар яуҙы һәм баш ҡалала урам һәм юлдарҙы ҡарҙан таҙартыу эше әүҙемләште.** Ҡаланың коммуналь хеҙмәттәре һауа шарттарының үҙгәреүенә һәр саҡ әҙер булыуҙарын белдерҙе. Һәр иртә һайын 320-ләп коммуналь техника, 300-гә яҡын юл эшсеһе юлдарҙы таҙартһа, тағы ла 139 техника берәмеге һәм 919 дворник йорттар яны юлдарын һәм ихаталарҙы ҡарҙан таҙарта. Әйткәндәй, йорт яны биләмәләрен ҡала хеҙмәттәре түгел, ә торлаҡ хужалары тарафынан вәкәләт бирелгән хеҙмәтләндереү ойошмалары таҙарта. Магазин, киоск һәм башҡа шәхси предприятие хужалары иһә үҙҙәренә тәғәйен биләмәне үҙҙәре тәртиптә тоторға һәм боҙлауыҡҡа ҡаршы саралар күрергә тейеш.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған көнәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Бауыр

❖ Был сара бауырҙы сәләмәтләндерә, үт ҡыуығынан таштарҙы сығара, һары һыу ауырыуын дауалай. 1 кг әрселмәгән картуфты яҡшылап йыуырға, күҙәүен алырға, 6 л һыу ҡойорға, 4 сәғәт талғын утта бешерергә. Саҡ ҡына тоҙ өҫтәргә, изергә һәм бер нисә сәғәткә ултыртып торорға. Бынан һуң өҫтөнә ҡалҡҡан һыуҙы ҡойоп алырға, көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 40 минут алда 2 ҡалаҡ эсергә. Дауаланыу курсы - 1 ай.

## Иммунитетты нығытыу

❖ Ашҡаҙан, эсәктәр эшмәкәрлеген әүҙемләштерә, ҡан тамырҙарын һәм быуындарҙы сәләмәтләндерә. 2 стакан кедр сәтләүеге ҡабығын, ярты стакан муйыл емешен, 1-әр балғалаҡ ҡайын бөрөһө, ҡыҙыл көртмәле япрағы, меңъяпраҡ үләне, һары мәтрүшкә, әрем, кесерткәнде ваҡлап, 1 литрлыҡ банкаға һалырға, 0,5 л араҡы ҡойорға. 3 аҙна бүлмә температураһында ҡараңғы урында тоторға. Һөҙөргә һәм көнөнә 2-3 тапҡыр 1 балғалаҡ бәләмдә сәйгә өҫтәп эсергә.

## Климакс мәлендә

❖ 25 г ҡара бөрлөгән япрағы (листья ежевики), 2-шәр г һырмауыҡ (ясменник) һәм арыҫлан ҡойороғо үләне, 15 г кипкән (сушеница болотная), 10 г әнәлек сәскәһен ҡушып болғарға ла, 10 өлөшкә бүлергә. Һәр көн иртән 1 өлөшкә 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, төрөп, 2 сәғәт төнәтергә. Һөҙөргә һәм көн дауамында эсергә. Бер аҙнанан климакс осоронда ваҡыты-ваҡыты менән бит-муйынға ҡан тулышыу сәбәпле янып-бешеү тойғоһо күҙәтелеүе юҡҡа сығасаҡ. Хәлем яҡшырҙы тип, дауаланыуҙы туҡтатмағыҙ, 10 көн буйы эшләгеҙ. Был ысул аллергик тымауҙан да дауалай.

## Стенокардия

❖ 1 стакан бал, 10 лимон һуты, 10 баш изелгән һарымһаҡты ҡушып, 7 көн ябыҡ банкала тоторға. Көнөнә 1 тапҡыр 4 балғалаҡ ашарға. Дауаланыу курсы - 2 ай.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!

# БАШҠОРТ КЕЙЕҘЕ

**Ҡул көсө менән биҙәкле кейеҙҙәр баҫыла. Был ҡатын-ҡыҙ шөғөлө иҫәпләнә һәм өй шарттарында уны йыл әйләнәһенә башҡаралар.**

1970 йылда Йылайыр районы Үргө Сәлим ауылында экспедиция мәлендә бер өйгә индек һәм саҡ уратылған кейеҙ өҫтөнә баҫманыҡ. Уны өйҙөң алғы яғында дүрт ҡатын тәгәрәтә ине. Мейес яғылған, ҡаҙанда кейеҙгә ҡойоу өсөн һыу ҡайнай. Ҡатындар тубыҡҡа таянып ултырған һәм терһәктәре менән шәп итеп кейеҙ тәгәрәтә.



Төп көс ҡушар һөйәгенә төшә. Беҙ ингәндә, эш аҙағына яҡынлашҡайны, кейеҙ кәрәкле формаға ингән, ярайһы уҡ йөйөлгән, уны нигеҙһеҙ ҙә тәгәрәтергә мөмкин ине. Кейеҙҙе ваҡыты-ваҡыты менән асып, ҡайын миндеге аша эҫе һыу ҡояр, һуңынан иплəп кенә кире ураталар, еп менән нығыталар һәм тағы тәгәрәтәләр. Кейеҙ баҫыу эше өҙлөкһөҙ 3 сәғәт тирәһе башҡарыла.

Әле һүрәтләнгән һәм башлыса ҡатын-ҡыҙ шөғөлө тип иҫәпләнгән боронғо был ысулды этнографик материалдар ҙа раҫлай. Ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, төркмән ҡатын-ҡыҙҙары кейеҙҙе ҡул менән баҫа. 1966 йылда Урта Азияға этнографик экспедиция ваҡытында этник йөнәттән болғанып бөткән Үзбәкстандың Сурхан-Дарьинский өлкәһендә һәм Таджикстандың көнбайыш өлөшөндә күскенсе үзбәк һәм таджик ҡышлаҡтарында кейеҙҙе тап ошо ысул менән баҫыуҙарын үҙ күҙҙәрем менән күрҙем. Ғалимдар ҡул менән кейеҙ баҫыу эштең аҙағында ҡулланыла тип билдәләй. Башҡорттар биҙәкле кейеҙ баҫҡанда мотлаҡ ҡул көсөн ҡулланған. Биҙәктең асыҡ, төҫтәре тигеҙ сығыуы һаҡсыл ҡараш талап иткән. Төньяҡ Кавказ халыҡтары ла биҙәкле кейеҙҙе тап ошолай баҫа.

Дөйөм алғанда, ошо ысул менән кейеҙ баҫыу технологияһы монгол, төрки, ҡайһы бер иран телле, айырым яфетик (кавказ) халыҡтарын үҙ эсенә туплай. Төрки телле халыҡтарҙа был традиция уларҙың төньяҡ-көнбайыш (ҡыпсаҡ) өлөшөндә (башҡорттар, ҡаҙаҡтар, ҡырғыҙҙар, ҡарағалпаҡтар, ноғайҙар, ҡумыҡтар, ҡарасайҙар, балҡарҙар, көньяҡ алтайҙар), өлөшләтә төньяҡ-көнсығыш (хакастар һәм малсы тывалар), көньяҡ-көнсығыш (төркмәндәр) осрай. Һанап үтелгән халыҡтарҙың күбеһе XX быуат башында йөйләүгә сығып, кейеҙ тирмәлә йәшәгән. Ултыраҡ тормош алып барған малсыларҙа кейеҙ көнкүрештә, шулай уҡ йолаларҙа ҡулланылған. Бөтөн ерҙә лә кейеҙ баҫыу күмәк эш иҫәпләгән. Башҡорттар ниндәй кейеҙ баҫыуына ҡарап, өмәгә кеше саҡырған. Тирмә өсөн тәғәйенләнгән кейеҙҙе ат ярҙамында тәгәрәткәндәр, көнкүреш өсөн - ҡул менән. Ҡайһы саҡта ике ысул да бергә ҡулланылған.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

ӘЙТӘГҮР!

# АУЫЛ ХӘЛДӘРЕ ШУЛАЙ!

**2018 йыл һеҙҙең төбәк өсөн ниндәй ваҡиғалары, күренештәре менән иҫтә ҡаласаҡ?**



***Илдар НАФИҠОВ, Әбйәлил районы хакимиәте башлығы:*** Әбйәлил районында әүҙем, ихлас халыҡ йәшәй. Уларҙы бөгөнгө көндәге проблемалар ғына түгел, ә иртәгәһе көндөң ниндәй булыуы ла борсой. Ғөмүмән, беҙҙә халыҡ бер көн менән генә йәшәмәй. Һуңғы ваҡытта район халҡы үҙҙәрен борсоған мәсьәләләрҙе бигерәк тә әүҙем күтәреп сыға. Беҙ, үҙ сиратыбыҙҙа, уларға тиҙ арала һәм объектив яуап биреп, билдәләнгән мәсьәләләрҙе хәл итергә тырышабыҙ. Үткән йылда бөтә өлкәләрҙә лә әбйәлилдәр уңышлы эшмәкәрлек алып барҙы, райондың ныҡлы киләсәге өсөн һәр кем үҙ өлөшөн индерҙе. Ауыл хужалығы киң үҫешкән төбәк булараҡ, Әбйәлилдә төп иғтибарҙың береһе нәҡ ошо өлкәгә йүнәлтелә. Әммә шәхси хужалыҡтар, йәғни ауыл халҡы ла, эш юҡ, тип ултырмай, күпләп мал аҫрап, етеш тормошта йәшәй.

Төбәктең иҡтисады үҫешһен өсөн ситтән инвестициялар йәлеп итеү иң оптималь варианттарҙың береһе. Беҙҙең районда ла төрлө предприятие һәм ойошмалар тарафынан ошо йөнәттән әүҙем эшмәкәрлек алып барыла. Аныҡлап әйткәндә, районға быйыл 198 миллиондан ашыу инвестиция йәлеп ителгән. Ул аҡса фермалар, мәктәп һәм балалар баҡсаһы төҙөүгә, ял итеү йортттарының инфраструктураһын яҡшыртыуға, Аҫҡарҙа ҡаҙанлыҡ ҡуйыуға, Ҡыҙыл йылғаһы аша бер нисә күперҙе сафҡа индереүгә, район үҙәге мәҙәниәт йортон реконструкциялауға һәм башҡа әһәмиәтле объекттарға йүнәлтелде. Алдағы йылда районға ОО "Лассельсбергер", ООО "Цемикс" һәм башҡа эре инвесторҙар килеүе көтөлә. Улар тарафынан төҙөләсәк объекттарҙа кешеләргә эш урыны буласаҡ, эшмәкәрлектәренән район ҡаҙнаһына һалым киләсәк, ә был иһә социаль программаларҙың яҡшы эшләүенә булышлыҡ итәсәк. Әйткәндәй, Әбйәлил социаль программаларҙы тормошҡа ашырыу йөнәтенән алдынғылар рәтендә. Мәҫәлән, үткән йылда районда 30476 квадрат метр торлаҡ сафҡа индерелде, шулай уҡ 15 етем бала үҙҙәренең йортонда Яңы йылды ҡаршылау мөмкинлеге алды. Был йөнәттән тағы ла райондың байтаҡ ҡына мәктәптәрендә, балалар баҡсаларында, клубтарҙа, "Ирәндек" балалар ял итеү лагерында ремонт эштәренең башҡарылыуын билдәләп үтергә кәрәк.

Район үҫһен өсөн йәштәрҙең тыуған ерендә ҡалып йәшәүе һәм эшләүе мөһим. Ләкин улар ситкә китмәһен өсөн яҡшы шарттар тыуҙырыу кәрәк. Иң актуаль мәсьәлә - уларҙың торлаҡлы булыуы. Ошоно күҙ уңында тотоп, районда төрлө программалар уңышлы эшләп килә. 2018 йылда өй һатып алыуға (төҙөүгә) 18942 мең һумлыҡ 18 сертификат тапшырылды. Йәштәрҙең районда ҡалыуы демографик хәлгә лә ыңғай йоғонто яһай. Былтыр Әбйәлилдә 600-ҙән ашыу сабый донъяға килде.

Әбйәлилгә күберәк туристар йәлеп итеү мөһим. Бының өсөн беҙҙә бөтә мөмкинлектәр ҙә бар. Бигерәк тә "Яҡтыкүл", "Юбилейный" шифаханаларын яңы кимәлгә күтәреү ял итергә килергә теләүселәрҙең һанын арттырырға булышлыҡ итәсәген анлап, улар тирәләй инфраструктураны яҡшыртыуҙы бурыс итеп ҡуйҙыҡ һәм тәғәйенләнгән эштәрҙең бер өлөшөн тамамланыҡ та инде. Шулай уҡ Әбйәлилдәге башҡа күлдәр тирәләй ҙә туристик әүҙемлекте арттырыу йөнәтенән эштәр алып барыла, сөнки туристарҙың төбәккә күп килеүе урындағы урта һәм бәләкәй эшҡыуарлыҡҡа үҫергә ярҙам итә. 2018 йылды позитив ноталарҙа япыҡ һәм 2019 йылдың да Әбйәлил халҡы өсөн уңышлы булыуына ышанам. Бөтә райондаштарымды һәм республика халҡын Яңы йыл менән ҡотлайым. Ҡабан йылы шатлыҡтары менән килһен!



***Рөстәм ШӘРИПОВ, Бөрйән районы хакимиәте башлығы:*** Беҙҙең район бай урманы, бейек тауҙары, Ағиҙел йылғаһы, мәмерйәләре, балы менән дан алған. Ысынлап та, райондың географик яҡтан урынлашыу урыны төбәктә туризмды, ауыл хужалығын һәм урмансылыҡты үҫтереүгә ҙур мөмкинлектәр бирә. Улар араһында өҫтөнлөклө урынды туризм алып тора. 2018 йылда Бөрйән районында 45 меңдән ашыу турист булып киткән, шул иҫәптән "Шүлгәнташ" мәмерйәһенә 41 мең кеше килгән. Ә Ағиҙел буйлап ағып төшөүселәр һанын аныҡ ҡына билдәләп тә булмай. Районда туристик йүнәлеш буйынса бер нисә шәхси эшҡыуар эшмәкәрлек алып бара. Улар аша ла, республиканың һәм илдең башҡа туристик агентлыҡтары аша ла Бөрйән ерен килеп күреүселәр һаны йылдан-йыл арта. 2020 йылда "Шүлгәнташ" мәмерйәһенең күсермәһен йәки музей-комплексын төҙөп бөтөү төбәккә килеүсе туристар һанын тағы ла арттырасаҡ, тип көтәбеҙ. Туризм эшҡыуарлыҡ һәм кәсепселеккә үҫергә мөмкинлек бирә. Шулай уҡ шәхси хужалыҡтар туристарға һөт, ит, ҡаймаҡ-май, йомортҡа, бал, икмәк һәм башҡа төрлө аҙыҡ-түлек һатып, аҡса эшләй.

Беҙҙең район инвестициялар йәлеп итеү буйынса республикала беренсе урында килә. Мәҫәлән, былтыр инвестиция аҡсаһына "Башҡортостандың 100 йыллығына - 100 объект" проекты сиктәрендә беҙҙең районда дүрт объект төҙөлә башланы. Уларҙың береһе - Яңы Собханғол ауылындағы 108 урынлыҡ мәктәп һәм 90 урынға иҫәпләнгән балалар баҡсаһын төҙөү тамамланды. Яңы йыл байрамдарынан һуң улар балаларҙы ҡабул итәсәк. Ағиҙел ҡасабаһында ла ошондай уҡ мәктәп-балалар баҡсаһы төҙөлә. "Шүлгәнташ" музей-комплексы ла ошо проектҡа индерелгән. Дүртенсе юбилей объекты - район мәҙәниәт һарайы. Уны реконструкциялау шулай уҡ ошо ҙур байрам уңайынан башҡарыла. Ғөмүмән, районда төҙөлөш эштәре әүҙем бара. Мәҫәлән, Әбделмәмбәт ауылында модулле фельдшер-акушерлыҡ пункты сафҡа индерелде, Иҫке Собханғолда Ағиҙел йылғаһы яры яҡтыртылды, райондың байтаҡ ҡына мәҙәниәт усаҡтары төҙөкләндерелде, Яңы йыл алдынан ғына Монасип ауылында клуб, Әбделмәмбәттә модулле ФАП асылды. Районда әлегә тиклем йөйгә миҙгелдә электр утының йыш һүнеүе бөтә яҡлап та ауырлыҡтар тыуҙыра ине. Әле резервлы электр линияһын төҙөү буйынса проект эштәре тамамланыу өҫтөндә, алдағы йылдарҙа ул сафҡа индерелһә, был мәсьәлә район халҡын башҡаса борсомаҫ, тип ышанам.

Киләсәк - йәштәр ҡулында. Уларҙың районда төпләнеп ҡалыуы, уҡыу йорттарын тамамлағас, кире Бөрйәнгә ҡайтыуы өсөн күп эштәр башҡарыла. Ләкин Бөрйәндең күпселек өлөшө ҡурсаулыҡ булғанлыҡтан, уларҙы ер участкалары менән тәьмин итеү ҙур ҡыйынлыҡтар тыуҙыра. Был мәсьәлә республика һәм хатта федераль кимәлгә сығып хәл итеүҙе көтә, сөнки ер бирелмәгәс, йәштәрҙе районда ҡалдырыу ауырға тура килә. Ә ауылдан китмәгән йәштәр, эш урындарының әҙ булыуына ҡарамаҫтан, тырышып донъя көтә, балалар үҫтерә. Әйткәндәй, беҙҙең район тыуым буйынса республикала беренсе урында килә. Эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнгән йәштәр күп. Улар үҙҙәренең ғаиләһен генә килем менән тәьмин итмәй, ә эш урындары ла булдыра.Беҙҙә лә табиптар менән тәьмин итеү мәсьәләһе киҫкен тора. Бөгөнгө көндә районға 13 табип кәрәк. Был мәсьәләне хәл итеү өҫтөндә лә эшләйбеҙ. Яныраҡ Башҡорт дәүләт медицина университеты студенттары менән осрашып, районға эшкә ҡайтырға саҡырҙыҡ. Уларҙы торлаҡ субсидиялар бүлеүҙе күҙ уңында тотабыҙ.

Ошондай матур күрһәткестәр менән йылды йомғаҡлап, яңы йылға аяҡ баҫтыҡ. 2019 йыл да Бөрйән районы өсөн тик яҡшы ваҡиғалары менән килһен, тип теләйем.

**Гөлназ МАНАПОВА**
**әңгәмәләште.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ХАЙУАНДАРҘЫ ЯҠЛА

**Ошо көндәрҙә РФ Дәүләт Думаһы хайуандарҙы яҡлау тураһында закон ҡабул итте. 2011 йылдың мартында ул тәүге уҡыуҙы үтте. 2016 йылдың көҙөндә Владимир Путин уны ҡабул итеүҙең мөһимлегенә иғтибар итте һәм Рәсәй Хөкүмәтенә тейешле йөкләмә бирҙе.**

Закон хайуандарҙы ҡаты мөғәмәлә итеүҙән яҡлай, шулай уҡ хайуандар менән эш иткәндә граждандарҙың хәүефһеҙлеген тәьмин итә. Хәҙер ниндәй ҙә булһа һылтау менән хайуандарҙы үлтереү, һуғыштырыу, хайуандарҙы башҡа йәнлектәргә һәм кешеләргә һөсләтеү тыйыла. Бер ниндәй сәбәпһеҙ хайуандан ҡотолорға ярамай - уны яңы хужаға йәки приютҡа тапшырырға кәрәк. Хайуандар менән ҡаты мөғәмәлә итеүҙе пропагандалауҙы, шулай уҡ фатирҙа, шәхси йортта һәм баҡса участкаһында ҡырағай йәнлектәр аҫрауҙы тыйыу индерелә. Хәҙер сауҙа үҙәктәрендә зоопарктар һәм кафе-барҙа, ресторанда хайуандар тотоу тыйыла. Закон хайуандарҙы йөрөтөү ҡағиҙәләрен билдәләй (шул иҫәптән хәүефле тоҡомло эттәрҙе) - муйынсаҡ һәм морондоҡ мотлаҡ. Хужаһыҙ хайуандар менән эш итеү тәртибе билдәләнә. Хәҙер "тотоу-стерилизация-вакцинация-кире ҡайтарыу" программаһы ғына мөмкин, бирҡаһы алынмаған осраҡта ғына. Тотҡандан һуң хужаһыҙ хайуан шунда уҡ приютҡа тапшырылырға, ә тотоу һәм элекке йәшәү урынына сығарыу видеоға төшөрөлөргә тейеш. Хужаһының мәғлүмәттәре яҙылған хайуандарҙы тотоу тыйыла (мәҫәлән, муйынсаҡтағы махсус бирҡалар менән), йәнлекте хужаһына кире ҡайтарырға кәрәк. Документ хайуандар өсөн приюттар ойоштороуҙы һәм уларҙың эшен дә билдәләй, мәҫәлән, уларҙы фатирҙа асырға ярамай. Приюттар өс көн эсендә үҙҙәренә килеп эләккән хайуан тураһында мәғлүмәт бирергә бурыслы. Шулай уҡ приюттарға дауалап булмаслыҡ сир йәки үтә ауыр йәрәхәт тураһында ветеринар һығымтаһынан тыш хайуандарҙы үлтереү тыйыла.

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

**2000 йылдарҙа тыуған көнөмә рус телендә сыҡҡан Британия ҡоралдары энциклопедияһын бүләк иткәйнеләр. Башҡорт хәрби уҡ-яны (уҡ-йәйә) тураһында яҙылған битен асып тороп тапшырҙылар. Был мәҡәләлә башҡорт уҡ-яны донъялағы иң шәбе тиелгәйне!**

# ИНГЛИЗДӘР МАҠТАҒАН ҠОРАЛЫБЫҘ...



*"Мәргән уҡсы" фестивалендә ҡатнашыусы Словакиянан Давид Филипп инглиз яны Лонгбоу менән.*

Мин, әлбиттә, хайран ҡалдым. Сөнки инглиздәрҙең Лонгбоу тип аталған оҙон яны ла бөтөн донъяға билдәле. Башҡаларҙы маҡтап бармай торған һауалы инглиздәрҙең күрмәгән-белмәгән башҡорттарҙың ҡоралын улай маҡтап яҙыуы ҡыҙыҡ тойолдо. Бөгөн традицион яндан атыу спорты яңыртыла һәм ул хаҡтағы мәғлүмәттәр ҙә бөртөкләп тигәндәй йыйыла. Үкенескә, беҙ был өлкәләге белемебеҙҙе юғалтып өлгөргәнбеҙ икән. Баҡтиһәң, һыбайлы башҡорттоң уҡ-яны европалыларҙыҡынан айырылған. Мәҫәлән, уҡ һул яҡтан түгел, ә уңдан һалынған. Былай һалғанда тиҙлек яҡшыра. Уҡты ла һуҡ һәм урта бармаҡ урынына баш бармаҡ менән тотҡандар. Был ваҡытта кереш уҡты янға ҡуша ҡыҫҡан.

Ян үҙе бик ҡатмарлы булып, бер нисә ағас төрөнән яһалған. Уртаһы бер төрлө, ос яғы икенсе, тышҡы яғы өсөнсө төрлө материалдан ҡоршалған. Бөтөн был ҡушылмалар шундай тығыҙ, тыңҡылдап торған ағас төҫөнә индерелгән. Уҡтың башы, сисеп алырлыҡ итеп, хайуандарҙың мөгөҙ осонан яһалған. Уҡ баштары йыш һынған, шуға ла уларҙы тулайым ташламау өсөн, баштарын ғына айырым алыштырырлыҡ ысул уйлап тапҡандар. Сөнки бында уҡтың ағас өлөшө ҡиммәткә төшкән. Ғөмүмән, яу янын эшләүгә өс йылға тиклем ваҡыт киткән. Янға яраҡлы ағастарҙы махсус шарттарҙа киптергәндәр. Ошондай бер ян 5-6 ат хаҡы торған. Хатта бөгөнгө көндә лә улай уҡ осһоҙ булмаҫ, 360 мең тирәһе торор ине. Һәр хәлдә, уҡсылар ярлы йәшәмәгән.

Башҡорт уҡсылары иң яҡшыһы булыуының бер дәлиле булып Көньяҡ Уралда уҡ-ян яһау өсөн материалдарҙың етерлек булыуы ла тора. Арыраҡ, мәҫәлән, ҡаҙаҡ далаларына ҡарай, ағас булмау сәбәпле, был ҡорал тағы ла ҡиммәтләнә төшә. Һәм, әлбиттә, бөтөн был күренештәр ҡорал мәҙәниәтенә лә йоғонто яһамай ҡалмай. Ҡалмыҡтар, ҡаҙаҡтар, монголдар ҙа шәп уҡсылар иҫәпләнә. Әммә интернетта һәм башҡа тарихи яҙмаларҙа уларҙың беҙҙең яҡҡа яу сапҡанда тап шул яндар артынан килгәне лә яҙыла. Тимәк, улар өсөн башҡорт яндары икеләтә ҡиммәт хаҡ менән табылған.

Бер оҫталыҡ та тиҙ генә килмәй. Һәр халыҡ тарихында ул быуаттар буйына туплана. Бына, мәҫәлән, әрмәндәр төҙөүсе булараҡ танылған. Улар борон-борондан таштан йорттар, һарайҙар төҙөгән һәм был һөнәр уларҙа ҡандан күсә килә. Әзербайжандар емеш-еләк менән һатыу итеп өйрәнгән. Ә башҡорттар уҡ-ян яһай һәм ҡуллана белеүе менән данлы булған. Хатта Наполеон һуғышында ла улар һаман уҡ-яндар менән алышҡан. Ә бит мылтыҡ, һыҙмалар башҡорттарҙа ун алтынсы быуатта уҡ булған. Дары урынына Уралда табылған көкөрт һалып атҡандар. Әммә ул заман мылтыҡтары әле камил уҡ булмаған. Көбәгенән яһап тороу, ураған һайын таҙартыу, йөҙ метрҙан алыҫҡа ата алмау, ике-өс минутҡа бер атыу кеүек мәшәҡәттәр башҡорттарҙы хушһындырмаған. Ул һыбайлы булғанда яндан өс йөҙ метрҙан сәпкә тейҙерә алған. Шул уҡ ваҡытта бер минутта утыҙға тиклем уҡ осороп өлгөргән. Был осраҡта уларға уҡтарын мылтыҡҡа алыштырып тороу кәрәк булғанмы? Юҡ, әлбиттә. Башҡорттар яу уҡ-яндары менән бөтөн Европаны үтеп, Парижғаса барып етә, шуға ла беҙҙең халыҡтың традицион ҡоралына шундай оло баһа бирәлер.

Минең фекеремсә, беҙҙең янды башҡаларҙан яҡшыраҡ әҙерләй белеүебеҙ тарих төпкөлдәренә китә. Әле беҙ милләт булып формалашмаған саҡта, R1b гаплогруппаһын йөрөтөүсе эрбиндәр (бөрйәндәрҙең ата-бабаһы), башҡорт этносын ғына түгел, ә Британия утрауҙарында йәшәгән халыҡты ла ойоштороусылар була. Юҡҡамы ни, инглиз (асылда - шотланд) уҡ-яны донъяла иң шәбе тип таныла. Бынан 5-6 мең йылдар әүәл, Арал алдында йәшәгән эрбиндәр, климат шарттары үҙгәреү сәбәпле, Көнбайышҡа юл ала. Көнбайыш Европаға барып етеп, унда тиҙ арала ир халҡын ҡырып бөтөрөп, хужа булып алалар. Бөгөнгө Испания, Португалия, Ирландия, Англия илдәрендәге халыҡтың ир-ат һыҙатының 70-80 проценты туранан-тура шуларҙан таралған быуындар булып тора.

Эрбиндәр малсылар була. Ул ваҡытҡа инде ат өйрәткән булалар. Был уларҙы дошмандары алдында бер башҡа үҫтереп ебәрә. Һыбайлы яугирҙар тиҙ хәрәкәт итә, йылҡының һөтө, ите аҙыҡ итеп ҡулланыла. Быларға өҫтәп, уларҙың уҡ-яны ла була. Көнбайыш Европала йәшәүсе ҡәбиләләр ҙә уҡ-ян менән таныш була. Кешелектең был ҡоралына 20 меңдән ашыу йыл бит. Әммә яндың яндан айырмаһы ла бар. Эрбиндәрҙең ҡатмарлы төҙөлөшлө яндары башҡаларҙыҡынан шәберәк булып сыға.

Артабанғы бер нисә мең йыллыҡтарҙа улар башланғыс фенотиптарын да үҙгәртәләр, бер нисә ҡат телдәрен алыштыралар, әммә яу уҡ-янын яһау тәртибен һаҡлап ҡалалар. Беҙҙең көндәргә ул инглиз уғы Лонгбоу булып килеп еткән.

Эрбиндәрҙең бер өлөшө Көнбайышҡа китмәй, Арал янында ҡала. Тағы ла бер нисә быуаттан улар Көньяҡ Уралға барып сығып, бөрйән башҡорттары тигән исем менән билдәле була. Тап бына ошо бөрйән башҡорттары әлеге яу уҡ-янын яһаусылар булып иҫәпләнә лә инде. Уларҙың был ҡоралы инглиз уҡ-яны менән бер төҙөлөштә булып килеп сыға.

Ҡыҙыҡ бер хәл, традицион уҡ-ян оҫтаһы, белорус мастеры Алексей Кряжев үҙенең һуңғы иң шәп янын башҡорт яны тип атай. Ул тап шулай атала ла - "Иң яҡшы башҡорт һунар яны". Презентацияһында ни өсөн былай атауын да аңлата. Бында ул янды "һунар яны" тип кенә яңылыша. Ә башҡорттарҙа һунар яны менән яу яны айырылған. Һунар ҡоралы - йәйә, яуҙыҡы - ян тип аталған. Белорус оҫтаһы яһаған ян - яу яны. Әммә был ғына яңылышлыҡ башҡорт янының әлеге заманда ла иң яҡшы яндарҙың береһе булып ҡалыуына йоғонто яһамай. Оҫтаның бындай иғтибарына һәм намыҫлы баһалай белеүенә рәхмәттән башҡа һүҙ юҡ.

**Артур ИҘЕЛБАЕВ.**

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# ОНОТОЛҒАН ҠӘҮЕМ

## Төркиҙәрҙең ғөрөф-ғәҙәттәре һәм байрамдары

Төркиҙәр һәр йылды кеше ғүмерендә башы һәм аҙағы булған бер әйләнеш рәүешендә ҡабул иткән. 12 йыллыҡ ваҡыт циклы тамамланып, 13, 25, 37 һ.б. (+ 12) йәштәре тулыусылар өсөн уларҙың йыл әйләнештәре яңынан башланыуы айырыуса әһәмиәтле, тип һаналған. Һәр циклдың аҙағы кеше тормошонда символик бер сик сифатында баһаланып, уны имен-аман үтеп китеү өсөн махсус магик ҡеүәтләү алымдары талап ителгән.

Яңы йыл ҡыш аҙағы - яҙ башында билдәләнгән. Яҙ йыһан циклының тыуыу, тыуҙырыу мәлен аңлатҡан, шуға күрә төркиҙәр Яңы йылды тәбиғәт яңырыуы, уның яңынан тыуыуы рәүешендә байрам иткән. 20 мартта иҫке йыл менән хушлашҡандар. Был көндә йорт-ихата йыйыштырылған, сүптән таҙартылған, бөтә нәмә тәртипкә килтерелгән. Кис еткәс, иҫке йылдың һуңғы байрам табыны уҙғарылған.

21 март көнө иртә менән Науруҙ байрамы башланған. Иң тәүҙә ата-бабалар рухына ҡорбан салынған, һәр ғаилә ҡорбан ашын мөмкин тиклем мулыраҡ итергә тырышҡан. Ҡорбан ашынан һуң магик ҡеүәле тип иҫәпләнгән күмәк уйындар, ярыштар, көрәш, сәпкә уҡ атыу, төрлө күңел асыу саралары ойошторолған. Халыҡ өйҙән-өйгә йөрөп, бер-береһен байрам менән ҡотлаған, бүләктәр тапшырған, иҫәнлек-һаулыҡ теләгән. Байрам ваҡытында уйын-көлкөгә, шаяртыуҙарға айырыуса иғтибар бирелгән, сөнки күңелле башланған йыл шундай уҡ күтәренке рух менән үтәсәк, тип иҫәпләнгән. Науруҙ төркиҙәрҙең иң тантаналы байрамдарының береһе булараҡ, бөгөнгө көнгә тиклем һаҡланып ҡалған.

Төркиҙәрҙең яҙғы ғөрөфтәре уңдырышлылыҡ магияһы менән бәйле. Тап ошо ваҡытта ҡамдар таҙарыныу, ер-һыуҙан магик көс-ҡеүәт алыу ритуалдарын башҡарған. Ҡайын ағасы япраҡ яра башлау менән Ер эйәһе хөрмәтенә доғалар ҡылынған, ҡорбан салынған. Үҙҙәрен тәбиғәттең айырылғыһыҙ бер өлөшө итеп ҡабул иткән төркиҙәр ерҙә, үләндә ялан аяҡ йөрөүҙе хуп күргән, сөнки улар ерҙең йәшәү көсө шул рәүешле кешегә лә күсә, тип уйлаған. Май айында һауа (ел) эйәһенә махсус ҡорбан килтерелгән, унын асыуы ҡабарып, ҡоро елдәрен ебәрмәһен өсөн, доғалар ҡылынған.

Йәй миҙгеле йылдың балиғ булыу осоро, тип һаналып, барса халыҡ өсөн иркенлек һәм ҡыуаныстар килтереүсе мәл булған. Әммә йәй көнө лә файҙалы заттар менән йәнәшә зыянлы һәм ағыулы ҡара көстәрҙең әүҙемләшеүе кешеләр өсөн хәүефле, тип уйлаған төркиҙәр һаҡланыу сараларын күргән. Яман көстәр йоғонтоһонан арыныу маҡсатында улар төрлө магик ритуалдар ҡулланған. Мәҫәлән, һәр йортта киптерелгән әрем бәйләме элеп ҡуйылған, сөнки унын еҫенән ҡурҡҡан ендәр был тирәне ситләтеп уҙасаҡ, тип иҫәпләнгән. Июнь урталарында, йәйге ҡояш торошо алдынан Мәңгелек Күк Илаһы - Тәңре хөрмәтенә ҡорбан салыу байрамы уҙғарылған.

Көҙ миҙгеле бөтә йәнле заттарҙың әүҙемлеге һүнә барып, тәбиғәттең һәм ваҡыттың ҡартайыу осоро итеп ҡабул ителгән. Көҙ айҙарында төркиҙәрҙең байрамдары, боронғо ғөрөфтәргә нигеҙләнгән ритуалдары күп булған. Көҙгө муллыҡ, мәшәҡәтле эштәрҙең тамамланыуы, илйорт именлеге айҡанлы Ер эйәһе хөрмәтенә, ата-бабалар рухына ҡорбан килтерелеп, оло байрам табындары ойошторолған, абруйлы ҡунаҡтар саҡырылған. Ҡамдар, күрәҙәселәр етеп килеүсе ҡыш алдынан һуңғы ритуалдарын уҙғарып, бар халыҡҡа имен тормош юраған. Шулай итеп, боронғо төркиҙәр йыл әйләнешен, ваҡыт ағышын үҙ йәшәйешенә параллель итеп ҡарап, унын һәр циклын тыуыуҙан үлеүгә табан барып, туҡтауһыҙ ҡабатланып торған процесс сифатында күҙ алдына килтергән.

**Рафаэль БӘҘӘРТИНОВ.**
**(Аҙағы).**

✓ *Интернет селтәрендәге әллә күпме махсус сайтҡа иғлан ҡуйып ебәрәһең дә, бер ыҙаһыҙ һатып та ҡуяһың кеүек. Ләкин ысынбарлыҡта хәл бөтөнләй икенсе. Айҙар, хатта йылдар дауамында торлаҡтарын һата алмағандар бихисап.*



# ЭШҠЫУАРЛЫҠТА...

## үҙ урыныңды табыу түгел, унда нығыныу мөһим

**Өфөнө һәм уның эргә-тирәһен генә алып ҡарағанда ла, төҙөлөштөң ниндәй йылдам темптар менән барыуын күрергә мөмкин. Торлаҡ төҙөү эштәре шулай әүҙем бара икән, тимәк, уны һатып алырға теләүселәр ҙә күп. Төҙөүсе компания һәм уның потенциаль клиенты араһындағы бәйләнеште, ғәҙәттә, халыҡ телендә риелтор, ә законға ярашлы әйткәндә, күсемһеҙ милек буйынса агент булдыра. Ә кем ул агент? Уны нисек һайларға? Торлаҡ һатып алғанда нисек алданмаҫҡа? Эшҡыуарлыҡҡа өйрәтеп буламы? Етеҙ тормош ритмынан нисек төшөп ҡалмаҫҡа? Ошо һәм башҡа һорауҙарға яуапты күсемһеҙ милек өлкәһендәге эшҡыуар Рим Наил улы ХӘСӘНОВ менән эҙләйбеҙ.**

**Әңгәмәбеҙҙе һеҙҙе эшҡыуарлыҡ өлкәһенә алып килгән юлдарҙы барлауҙан башлайыҡ...**

- Һәр кеше тормош юлын үҙе һала. Ул юл ҡайһы тарафҡа алып бара, ғүмер ағышында ниндәй боролоштар яһай, юғарыға үрмәләйме, әллә, киреһенсә, аҫҡа тәгәрәйме - барыһы ла уның үҙенән тора. Шулай уҡ ҡасан хеҙмәт юлын башлау ҙа тик үҙебеҙҙең ихтыярҙа. Мин Мәләүез ҡалаһынан. Ундағы башҡорт гимназияһында, һуңынан Стәрлетамаҡтағы башҡорт-төрөк лицейында белем алдым. Өфө авиация техник университетының бер юлы төрлө факультеттарында уҡып, инженер һәм иҡтисадсы һөнәрҙәренә эйә булдым. Университеттың 2-се курсында күсемһеҙ милек буйынса агент булып эшләй башланым һәм уҡыуҙы тамамлағас та ошо өлкәлә ҡалдым.

**Фатир һатырға йәки алырға теләүсегә уның кәрәклеген нисек дәлилләрһегеҙ?**

- Күсемһеҙ милек баҙарының эше көндән-көн әүҙемләшә. Фатир һатыусылар ҙа, уны һатып алырға теләүселәр ҙә бик күп, сөнки быға тәьҫир итеүсе факторҙар, йәғни йәш һәм күп балалы ғаиләләрҙең торлаҡ шарттарын яҡшыртыуҙы күҙаллаған хөкүмәт программалары эшләүе, ипотека ставкаларының кәмеүе һәм башҡалар, бихисап. Ошо күптөрлөлөк араһында нисек үҙеңә яйлы шарттарҙы табырға, бөтә талаптарыңа тура килгән фатир йәки йортто нисек эҙләргә, уның "таҙалығын" нисек тикшерергә, ипотека юллап, ниндәй банкка мөрәжәғәт итергә, нисек мутлашыусылар ҡулына эләкмәҫкә, документтарҙы ни рәүешле дөрөҫ тултырырға - быларҙың барыһын да агент атҡарып сығырға ярҙам итә. Ҡыҫҡаса әйткәндә, агент фатир йәки йортто, ер биләмәһен, баҡсаны, ғөмүмән, күсемһеҙ милекте юғалтыуҙарһыҙ һәм ышаныслы юлдар менән һатырға йәки һатып алырға булышлыҡ итеүсе белгес. Шул уҡ ваҡытта уның эше клиенттарға фатир күрһәтеп йөрөүгә генә ҡайтып ҡалмай. Ул бик күп хоҡуҡи акт, закондарҙы белергә бурыслы. Шулай уҡ банк өлкәһендәге, илдәге, донъялағы иҡтисади хәл тураһында ла хәбәрҙар булырға тейеш.

Күсемһеҙ милекте һатыу - һатып алыу менән тәүге тапҡыр осрашҡандар, ғәҙәттә, агент кәрәклеген инҡар итә. "Аҡсам сығып бармай әле", "Үҙем дә осона сығам мин", тип, эште башлап та, аҙағына тиклем еткерә алмағандар һанап бөткөһөҙ. Күптәр бындай яуаплы һәм ҙур финанс менән бәйле аҙымды интернетта яҙылған кәңәштәргә таянып ҡына эшләп булмағанын ниндәйҙер күңелһеҙ осраҡҡа юлыҡҡас ҡына аңлай, ҡыҙғаныҫҡа күрә. Мутлашыусылар ҡулына эләгеп, фатирһыҙ ҙа, аҡсаһыҙ ҙа ҡалыусылар торлаҡты һатҡан саҡта йәшерелгән, әммә һуңынан ҡалҡып сыҡҡан проблемаларын хәл итә алмайынса аптырағандар агентҡа килә. Агенттар уларға законға ярашлы ярҙам итеү юлдарын эҙләй, хоҡуҡтарын яҡлап, судтарға йөрөй.

Элегерәк халыҡ күсемһеҙ милек буйынса агенттарға әллә ни ыңғай ҡараш та булманы. Һуңғы ваҡытта ғына уларҙың эшмәкәрлеге ыңғай баһалана башланы. Әлеге көндә бөтә Рәсәй буйлап 500 мендән ашыу агент эшләй. Әгәр ҙә уларҙың эшенә һорау артмаһа, был яҡшы агенттар тураһында фотоһүрәт менән тулы мәғлүмәт була, шулай уҡ клиенттарҙан уҙған айҙа, кварталда, йылда күпме килешеү эшләгәнлеге лә йәшерелмәй. Тағы ла бер бүлмә генә биләп эшләп ултырыусы агентлыҡтарҙың да эшмәкәрлеге шик тыуҙырмайынса ҡалмаҫҡа тейеш. Етди компанияның, ғәҙәттә, штаты ҙур була.

**Фатир һатып алып та, йорттоң төҙөлөп бөткәнен көтөп ала алмаған алданыусылар күп. Уларҙың хатаһын нисек ҡабатламаҫҡа?**

- Ундай кешеләр үҙҙәренең аңһыҙлығы арҡаһында ошондай хәлгә тарый. Күптәр осһоҙ хаҡҡа ҡыҙығып алдана. Ошо уҡ районда тәҡдим ителгән башҡа фатирҙарға ҡарағанда, сағыштырмаса нығ арзан тәҡдим иткән төҙөүсе компаниянан баш баҫып ҡасырға кәрәк. Бындай аҙым мутлашыусыларҙың иң яратҡан алымы. Күсемһеҙ милек өлкәһендә эшләүсе профессиональ төҙөлөш майҙанындағы эштәрҙе бер-ике йылға алдан күрә. Шуға күрә беҙҙең халыҡ бындай яуаплы аҙымды эшләр алдынан ошо өлкәне яҡшы белгән белгес менән кәңәшләшеүмөһим икәнлеген аңлай башлағас ҡына, алданыуҙар кәмейәсәк. Хата эшләү өсөн күп кәрәкмәй, ә уның эҙемтәләрен бөтөрөү үтә лә ҡыйбатҡа төшәсәк икәнен һәр саҡ иҫтә тотоғоҙ.

**Клиенттарығыҙҙың социаль портретын һүрәтләгеҙ әле? Һеҙгә мөрәжәғәт итеүселәрҙән сығып һүҙ йөрөткәндә, фатир һатып алырға теләүселәр күпме, әллә һатырға тырышҡандармы?**

- Йәш буйынса ҡарағанда, 21 йәштән алып 55 йәшкә тиклемгеләр иң күп процентты тәшкил итә. Ҡатын-ҡыҙҙар күп килә. Фатир һайлауҙа ла күберәген ҡатын-ҡыҙҙар "етәкселек" итә, ирҙәре баш ҡағып, эргәләрендә генә тора. Ниндәй банк менән хеҙмәттәшлек итеүҙе лә гүзәл заттар хәл итә.

Фатирҙарын һатырға ярҙам итеүҙе һорап мөрәжәғәт итеүселәр айырыуса күп. Тәү ҡарашҡа, интернет селтәрендәге әллә күпме махсус сайтҡа иғлан ҡуйып ебәрәһең дә, бер ыҙаһыҙ һатып та ҡуяһың кеүек. Ләкин ысынбарлыҡта хәл бөтөнләй икенсе. Айҙар, хатта йылдар дауамында торлаҡтарын һата алмағандар бихисап. Шуның өсөн

***РИМ ХӘСӘНОВ:***

*Фатир һатыу-алыу мәсьәләһен үҙен агент (риелтор) тип атаусы һәр кемгә ышанып тапшырыу аңһыҙлыҡ, әлбиттә. Профессиональ, ышаныслы агентты тик таныштар, дуҫтар, туғандар аша эҙләргә кәңәш итәм. Улар араһында ошо юлды үткән бер кеше булһа ла табыласаҡ. Уларҙың уңышлы атҡарып сығарылған килешеүе - агенттың юғары һөнәри кимәлен күрһәтә.*



тиклем агент булмаç ине, сөнки тәҡдимде ихтыяж булдыра бит.

**Күсемһеҙ милек буйынса агент һайлағанда нисек яңылышмаҫҡа?**

- Фатир һатыу-алыу мәсьәләһен үҙен агент (риелтор) тип атаусы һәр кемгә ышанып тапшырыу аңһыҙлыҡ, әлбиттә. Профессиональ, ышаныслы агентты тик таныштар, дуҫтар, туғандар аша эҙләргә кәңәш итәм. Улар араһында ошо юлды үткән бер кеше булһа ла табыласаҡ. Уларҙың уңышлы атҡарып сығарылған килешеүе - агенттың юғары һөнәри кимәлен күрһәтә.

Хәҙер интернет селтәрендәге баһаламалар нигеҙендә фекер туплау йыш күренеш. Ләкин ул баһаларҙың күпселек өлөшө теге йәки был агентлыҡтың заказы буйынса яҙылыуы мөмкин. Шуға күрә, күҙгә ҡарап реаль баһалама биргән кешенең һүҙенә генә ҡолаҡ һалырға кәрәк. Әгәр ҙә кәңәш бирерлек кеше табылмаһа, мөрәжәғәт итергә теләгән агентлыҡтағы эш мөхитенә иғтибар итеү ҙә күп нәмәгә күҙҙе аса. Үҙ эшенә яуаплы, етди ҡараған агентлыҡтарҙың стенаһында мотлаҡ рәүештә иң

дөрөҫ иғлан төҙөп һатыу процесы өҫтөндә эшләү кәрәк. Мин бушҡа ғына "дөрөҫ иғлан", тип әйтмәнем, сөнки тәҡдим ителгән фатир тураһындағы мәғлүмәтте һатып алыусыға аныҡ, тулы, уны ҡыҙыҡһындырырлыҡ итеп, мотлаҡ фотоһүрәттәр менән тулыландырып биргәндә генә ул "эшләй". Фотоһүрәттәрҙе лә матур ракурстар һайлап төшөрә белеү үҙ файҙаһын бирә.

Фатир һатып алырға теләүселәр ҙә арта. Бөгөнгө көндә күптәр торлаҡ шарттарын ипотека кредиты ярҙамында хәл итә йәки уны яҡшырта. Тик ипотека юллауҙы ҡайҙан, ни рәүешле башларға, ниндәй документтар кәрәклеген күптәр белмәй. Әлбиттә, банктарҙың сайтында ипотекаға ҡағылышлы бөтә мәғлүмәт тә бирелгән, ләкин улар рәсми, ҡоро тел менән яҙылған һәм бөтә нескәлектәре лә күрһәтелмәгән. Шуға күрә, банкка үҙаллы ипотека юлларға барыусылар әллә күпме кәртәгә осрап, кәрәкле документтар артынан сабып хәле бөтөп, ҡул һелтәп ҡуйырға ла мөмкин.

**Эшҡыуарлыҡ - һәләтме әллә өйрәнергә мөмкин булған һөнәрме?**

- Эшҡыуарлыҡ - ул талант. Һәр кем эшҡыуар була алмай. Әгәр ҙә тәбиғәт тарафынан ниндәйҙер башланғыс һалынмаған икән, төрлө тренингтарға йөрөп, китап уҡып йәки билдәле бизнесмендарҙың кәңәштәрен тыңлап ҡына уңышлы эшҡыуар булыуы мөмкин түгел. Бына, мәҫәлән, журналистарҙы алайыҡ. Шулай уҡ тәбиғи һәләте булмаған кешене ошо йүнәлештә белем биргән донъяның иң яҡшы уҡыу йортонда йылдар дауамында уҡыт, әммә унан яҡшы журналист сыҡмаясаҡ. Бейеүсе, йырсы, артист, рәссам һәм башҡа ошондай ижади һөнәрҙәрҙең нигеҙе, тағы берҙе билдәләп үтәм, тыумыштан килгән һәләт. Шуға күрә, эшҡыуарлыҡты ла, ниндәйҙер кимәлдә, ижади һөнәрҙәр рәтенә индерергә була.

Бөгөн эшҡыуарлыҡ нигеҙҙәрен мәктәптә үк бирә башларға кәрәк, тигән фекерҙе хуплайым. Бындай дәрестәр тотош бер класҡа эшҡыуарлыҡҡа килергә юл асмаһа ла, кемгәләр үҙенең һөнәри булмышын аңларға ярҙам итергә мөмкин. Әгәр ҙә эшҡыуарлыҡ буйынса дәрестәр урын-еренә еткерелеп, был өлкәнең бөтә нескәлеген күҙ уңында тотоп үткәрелһә, балаларҙы ҡыҙыҡһындырырлыҡ миҫалдар менән байытылһа, әлеге тәҡдимдең файҙаһы буласағына шигем юҡ. Ләкин ул белем уҡытыусы тарафынан түгел, ә ошо өлкәлә эшләгән кешенән килергә тейеш.

**Конкуренцияға ниндәй ҡараштаһығыҙ?**

- Конкуренция булырға тейеш. Ул эшҡыуарға бер урында тапанмаҫҡа, замандан артта ҡалмаҫҡа этәргес көс бирә. Арыҫланды аяҡтары ашата. Беҙҙә лә шулай. Креслоға сумып, ҡағыҙҙарға ҡул ҡуйып ултырыуҙан эштәр ырамай ул. Эшҡыуарлыҡта үҙ урыныңды табыу ғына түгел, иң мөһиме, унда ныҡыныу. Ә быны өсөн йүгерергә, барыһына ла өлгөрөргә, актив, һәр яңылыҡҡа асыҡ булырға, уҡырға, тормош талаптарына ҡулайлашып йәшәргә һәм эшләргә өйрәнергә кәрәк.

**Һеҙ ниндәй етәксе? Ниндәй сифаттарығыҙ һеҙгә ярҙам итә һәм, киреһенсә, ҡамасаулай?**

- Агентлыҡ етәксеһе булараҡ, уның сифатлы эшләүенә, яйға һалынған булыуына мин яуаплы. Үҙ эшемдә яратыуым эшмәкәрлекте уңышлы алып барырға ярҙам итә. Мин үҙ урынымдамын, тип ышанысլы әйтә алам.

Һәйбәт етәксе - ул ғәҙел етәксе. Ә ғәҙел булыр өсөн ҡайһы саҡта ҡаты булырға кәрәк. Мин иһә ҡул аҫтымда эшләгәндәргә яҙа бирергә кәрәккәндә уларҙы йәлләй башлайым. Эштән бушатырға кәрәккән осраҡта үҙен күрһәтергә тағы ла мөмкинлек бирәм. Ошондай артыҡ кешелеклелегем һуңынан үҙем өсөн насар эҙемтәләргә килтерә. Етәксе булараҡ ҡатыраҡ холоҡло булырға теләр инем.

**Тормош эштән генә тормай. Нисек ял итәһегеҙ?**

- Минең өсөн эш мәшәҡәттәренән мейене ял иттереү өсөн иң шәп ысул - ғаиләм менән булыу, китап уҡыу һәм сәйәхәт итеү. Көсөргәнешле эш көнөнән һуң өйгә ҡайтып, улым менән ҡыҙымдың шат йөҙҙәрен күрһәм, бөтә арыу-талыу һыпырып алғандай була. Улар менән шау-гөр килеп уйнап, кәләш менән төрлө пландар ҡора-ҡора ултырып сәй эсеү үҙе үк матур ял минең өсөн. Китапты һыу кеүек "эсәм". Ҡағыҙға баҫылған аҡыл ҡаҙнаһының шул тиклем дә мул булыуына һоҡланам. Ғәҙәттә, бер юлы 3 - 4 китап уҡыйым һәм уларҙың һәр береһе нимәгәлер өйрәтә.

Мин тауҙарҙы яратам. Мәҫәлән, Непалда диңгеҙ кимәленән 5650 метр бейеклеккә күтәрелеп торған Кала-Патар тауын "яуланым" һәм ул көндө мин 2018 йылдың иң яҡшы ваҡиғаһы, тип әйтә алам. Унда менгән саҡта юл ыңғайы шулай уҡ Нагарджинг (5100 метр) һәм EBC-ҡа (5360 метр) һуғылдыҡ. Күтәрелеүе ныҡ ауыр булды. Хатта, оят булһа ла әйтәйем, бер нисә тапҡыр кире боролорға ла уйлаған инем, шулай ҙа үҙемдә ҡулға алып, бөтә ихтыяр көсөмдө туплап, маҡсатыма өлгәштем - тау түбәһенә менеп еттем. Тау үренә артылғанда физик йәһәттән көсөргәнешлек арта, ә эмоциональ көмей, эш ваҡытында төрлө уйҙарҙан ҡайнаған аң еңеләйеп ҡала. Тауҙар минә тынысլыҡ тойғоһо бирә. Унда минең бөтә борсолоуҙарым юҡҡа сыға. Бейеклектә бөтөнләй икенсе кимәлдәге уй-фекерҙәр тыуа. Ошондай походтарҙа мин үҙем өҫтөндә эшләйем, үҙемдең эске донъямды тәүләйем. Һәр кеше, минеңсә, ҡайһылыр ваҡытта япа-яңғыҙ, тәбиғәт менән ҡалып, бөтә нәмәнән дә иркенлек, ирекле тойоп алырға тейеш.

**Бөгөнгө етеҙ, тиҙ үҙгәреүсән тормош ритмында үҙеңде юғалтмайынса, һәр саҡ сафта булыу рецептығыҙ бармы?**

- Был өлкәлә оҙаҡ ваҡыт эшләп, етерлек тәжрибә туплап, үҙ эшемдә асһам да, тәүге мәлдәрҙә эске көсөргәнешлек тойғоһонан арына алмай торғайным. Әле лә көн һайын тиҙ генә ҡарар ҡабул итергә кәрәкле, шулай уҡ хәүефле мәлдәр тыуып тора, ләкин мин уларҙы тынысыраҡ үткәрергә өйрәндем. Төрлө ситуацияла ла тыныс ҡала белеү, үҙеңде ҡулда тотоу оҫталығы кешегә тыумыштан бирелә, тигән фекерҙәмен. Ләкин ул саҡта ла уны үҫтерергә, тормошта дөрөҫ ҡуллана белергә өйрәнергә, уны тәрәнәйтеп, үҙеңдә тәрбиәләргә кәрәк. Ә үтә лә тынысһыҙ, ҡыҙыу ҡанлы кешене үҙгәртеп булмай. Шулай ҙа әленән-әле уны тынысլыҡҡа саҡырып, артыҡ ныҡ нервы түкмәҫкә өндәп тороу уның өсөн яҡшылыр, тим.

Эшкә ҡағылышлы йәки йәшәйештең башҡа өлкәһендә килеп тыуған ниндәйҙер мәсьәләне енеләрәк үткәреп ебәреү мөһим. Ҡайһы берәүҙәр бөтөнләй тормош мәшәҡәттәренән арына алмай, һәр ваҡыт нимәгәлер борсола, уйлана, нервыһын бөтөрә һәм һаулығына ҙур зыян килтерә. Ә һаулыҡ - беҙҙең төп байлығыбыҙ. Шуға күрә, артыҡ көйәләнмәҫкә, сәбәләнмәҫкә, тыныс булып ҡала белергә тырышыу мөһим. Был донъяла барыһы ла үтә һәм хәл ителмәҫтәй проблемалар булмай.

Мин бик тәүәккәл аҙымдар эшләргә яратмайым. Шул уҡ ваҡытта ниндәйҙер мәсьәлә өҫтөндә оҙаҡ уйланмайым. Ҡабул ителгән ҡарарҙың дөрөҫлөгө мәсьәләне оҙаҡ йәки тиҙ уйлауға бәйле түгел. Иң мөһиме, маҡсатҡа ынтылғанда, эш барышында ваҡытында дөрөҫ төҙәтмәләр индереү, килеп тыуған хәлдәрҙән юғалтыуһыҙ сығыу юлдарын табыу оҫталығы. Ошоларҙың барыһы ла минә тормош ағышында юғалып ҡалмаҫҡа мөмкинлек бирә.

**Гәзиттән "Әйтер һүҙем бар!" рубрикаһы аша ниндәй уй-фекерегеҙҙе еткерергә теләр инегеҙ?**

- Бөгөн ауылдарға иғтибар бик әҙ. Бигерәк тә белем биреү системаһы йүнәлешендә ауылдар менән етди эшләргә кәрәк. Шулай уҡ күберәк төрлө спорт һәм үҫтереүсе түңәрәктәр булдырыу, унда балаларҙы ылыҡтырыу мөһим. Ҡала балалары был йәһәттән күпкә ота, сөнки үҙҙәре теләгән түңәрәкте һайлап йөрөү мөмкинлектәре бар. Түңәрәктәр баланың аң кимәлен үҫтерә, физик яҡтан ныҡыныырға булышлыҡ итә, тиҫтерҙәре менән аралашыу йәмғиәттә үҙҙәрен ышаныслыраҡ тоторға булышлыҡ итә. Ауылда үҫкән баланы ҡаланыҡы менән сағыштырып, шуны күҙәтәм. Тәүгеләренең араһында күптәр бәйләнешкә ауыр инә, ниндәйҙер яңы тенденцияны тотоп ала һалып, шуны үҙ эшендә ҡулланыу ҙа уға ҡыйынлыҡтар тыуҙыра. Шуға күрә, ошо йүнәлештә әүҙемерәк эштәр кәрәк. Үҙем дә киләсәктә башҡорт балалары өсөн төрлө түңәрәктәр асыу, уларға күберәк мөмкинлектәр булдырыу уйы менән йәшәйем.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Шәхси эшен ойошторған һәм уңышлы эшмәкәрлек алып барған эшҡыуарҙар менән әңгәмәләр үткәреү барышында уларҙың барыһына ла хас төп һыҙаттарҙы билдәләнем. Ул - үҙ-үҙенә ышаныусанлыҡ, эшлекле мөнәсәбәт урынлаштыра белеү, инновацион технологияларҙы урынлы ҡулланыу, үҙенең эшен дөрөҫ тәҡдим итә белеү, юғары ойоштороу һәләте. Биш йыл эсендә үҙенең эшмәкәрлеген бөтә ил буйлап йәйелдереүгә өлгәшкән бөгөнгө ҡунағыбыҙҙа ла ошо сифаттар ярылып ята. Уға уңыштар ғына теләргә ҡала.**

**Гөлназ САФУАНОВА**
**әңгәмәләште.**

*ӘЙҘӘГЕҘ...*

**Үткән йыл минең өсөн иҫтәлекле ваҡиғаларға үтә лә бай булды, тиһәм, бер ҙә шаштырыу булмаҫ. Быйыл бөтә Рәсәйҙе тиерлек урап сыҡтым. Үҙемде төрлө өлкәлә һынап ҡараным, йәшәү рәүешемдә үҙгәрткән ҡарарҙар ҡабул иттем, әллә күпме форумда ҡатнаштым.**

# БЕЛЕМГӘ ЫНТЫЛАЙЫҠ!

Мин һәр ваҡыт хәрәкәттә. Гел нимәләр эшләргә, ҡайҙалыр ҡатнашырға, өйрәнергә, белемемде арттырырға тырышам. Шулай быйыл "Смарт-тау" төбәк белем биреү форумында ҡатнаштым. Ул саранан һуң проект төҙөү йүнәлешендә әүҙем эшләй башланым. Ә иң иҫтә ҡалғаны "Амур" Бөтә Рәсәй йәштәре белем биреү форумы булды. Ошо форумға барғанда мин беренсе тапҡыр Алыҫ Көнсығышты күрҙем. Хабаровск, Амурҙағы Комсомольск ҡалалары һоҡландырҙы, кешеләре лә яҡшы тәьҫораттар ҡалдырҙы. Грант алыу ниәте менән Башҡортостандан өс кеше юлланғайныҡ, ләкин форумға барғас ҡына гранттар конкурсы булмаясағы асыҡланды. Шулай ҙа күңелебеҙ төшмәне, сөнки форумда белем биреү майҙаны ныҡ көслө булды, саҡырылған спикерҙар ҙа белемде яңы форматта, ҡыҙыҡлы итеп еткерҙе. Белем биреү программаһында әүҙем ҡатнашҡаным өсөн мине Маҡтау грамотаһы менән билдәләнеләр һәм бүләк тапшырҙылар.

Шулай уҡ быйыл "Рәсәй маршруты" тип исемләнгән блогерҙар, журналистар, этнографтар һәм белгестәр экспедицияһы составында Байкалға барыу бәхете лә тейҙе. Бындай сәфәрҙәрҙә ҡатнашыу арзан түгел. Шуға күрә, экспедиция составына әләгеүемде белгәс тә спонсорҙар эҙләй башланым: туристик фирмаларға хаттар яҙҙым, ташламалар тураһында белергә теләп, университетҡа мөрәжәғәт иттем һәм минә БДУ-ның студенттар һәм аспиранттар профкомы ярҙам ҡулы һуҙҙы. Бер аҙналыҡ сәфәр барышында Байкал арьяғы крайы, Бүрәт республикаһы һәм Иркутск өлкәләре менән таныштыҡ. Сәйәхәт тураһында фото һәм видео отчеттар эшләп алып ҡайттыҡ.

Июлдә үҙебеҙҙең республикала уҙғарылған "Аҫылташ" башҡорт мәҙәниәте форумында волонтер булдым. "Маҡсаттар территорияһы" Бөтә Рәсәй йәштәре белем биреү форумының "Цифрлы донъя" сменаһында ҡатнаштым. Унда менәрләгән кеше килгәйне. Беҙҙе 50 командаға бүлделәр һәм беҙҙең команда 1-се урын яуланы. Шулай уҡ йәй аҙағында "Мин гражданин" төбәк белем биреү, "Евразия" халыҡ-ара йәштәр форумдарында ҡатнашыу бәхете тейҙе. Һуңғы форумда мин үҙемдең "Минең төбәгем" исемле блог-тур проектын тормошҡа ашырыу өсөн 100 мең һумлыҡ грант оттом. Минең проекттың маҡсаты: медиаөлкәлә (журналист, интернет-блог алып барыусылар, фоторәссамдар, видеооператорҙар) эшләүсе кешеләрҙе Башҡортостан буйлап 3 көнлөк туристик сәйәхәткә алып сығыу. Сәфәргә шулай уҡ төбәктә билдәле блогерҙы ла йәлеп итергә уйлайым. Был проектты тормошҡа ашырыу республикала туризмды популярлаштырыуға, төбәктең туристик мөмкинлектәрен күрһәтеүгә ҡайтып ҡала.

Уҡыуым менән бер рәттән, ошо һәм башҡа төрлө форумдар, сараларҙа ҡатнаша алыуым, төрлө төбәктәрҙе күреүем, яңы дуҫтар табыуым үткән йылымды сағыуыраҡ итте. Мин үҙемә яңы маҡсаттар ҡуйып, икенсе төрлө проекттар өҫтөндә лә эшләү ниәте менән яныл, 2018 йылдың һуңғы биттәрен яптым.

Башҡортостан йәштәренә "Әйҙәгеҙ, белемгә ынтылайыҡ, яңы 2019 йылда төрлө форумдарҙа әүҙемерәк ҡатнашайыҡ, үҙебеҙҙең мөмкинлектәрҙе күрһәтәйек, республикабыҙға гранттар йәлеп итәйек", тип өндәшкем килә. Ләкин ундай сараларға барыуын барғас, бөтә көстө белем алыуға, һәр яңылыҡты һеңдереп ҡалырға, барыһына ла төшөнөп ҡайтырға тырышырға кәрәк. Ҡайһы берәүҙәрҙең бушты бушҡа ауҙарып йөрөүен күреп, эсем боша. Улар бит ошондай сараға килергә ныҡ ынтылған кемдеңдер урынын алған. Сәйәхәт итер өсөн бындай белем биреү форумдарын ҡулланыу урынһыҙ, минеңсә. Ундай сараларҙы маҡсатҡа ярашлы файҙаланырға кәрәк. Ә Башҡортостандың Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығы бындай башланғыстарҙы гелән күтәрмәләп, ярҙам итеп тора, шуға күрә һеҙҙән тәүәккәллек кенә кәрәк.

**Әйзилә МӨЛӨКОВА,**
**БДУ студенты.**

✓ **Шамил буш шешәне тотоп, иҙәндә әйләндергеләп алды: - Бар идея шунда ине. Музейға алып барып тапшырғанда, Мостафа ҡарт, моғайын, бер сәмәйгә алыштырыр ине уны, протезды.**



Ситдиҡ ҡарттың вафатын Ташлыйылға ауылы халҡы, гәҙәттәгесә, кеше тыуа, ғүмер итә, үлем етә, тип ҡабул итте. Етерлек йәшәгән, күререн күргән инде, мәрхүм. Һуғыш ауырлығын, аслыҡ-ялангаслығын, яуҙан һуңғы шаңдауҙарҙы кисергән, ауылдың тағы бер тыл ветераны китеп барҙы, тип әсенеүселәр ҙә, ике йыл ныҡлы сирләгән ҡартты йәлләп, ваҡыты еткәндер, тип һығымта яһаусылар ҙа булғандыр. Ауылдаштары, йолаһына тура килтереп, ауыл осондағы зыяратҡа алып барып ҡуйҙы. Ауыл башлығы, ололар телмәр ҙә тотто. Ғүмер буйы леспромхозда бил бөккән Ситдиҡ ҡарт быға бик лайыҡ та, тик иҫән сағында ишетһә, тағы ла арыу булыр ине. Өлкән ҡыҙы Сәлимәнең улы, йәки ейәне еҙ баш Фәнил яратты олатаһын. Башҡалар ҡәбер ҡаҙырға киткәс тә Шамил дуҫы менән бер суҫка балаһын "аяғынан тотоп һелккәс", Йәнекәй тауына менеп, бер оҙон ҡарағасты йыҡтылар ҙа шунда ҡәбергә бура бураныл ар. Йыназа башланы алдынан алып та төштөләр. Борон-борондан ҡәбер өҫтөнә ҡарағастан бура ултыртып, таш ҡаҙап ҡуялар. Йолаһы шулай.

Мәңгелек донъяға күскәс, ошо ауылда тыуып үҫеп, ғүмер кисергән әҙәмдәргә ана шул Йәнекәйҙең быуаттар буйы йәнен һаҡлаған тик бер генә ҡарағастан ҡәлғә төҙөп, хөрмәт күрһәтелә. Ә ҡарағас - Уралда иң бейек ағас, сөнки башҡалар менән сағыштырғанда, тамырҙары күпкә тәрәндә. Оло хөрмәт был. Зыяратта һәр ҡәбер тиерлек ҡарағас бура менән уратылған. Был кеше ошо ерҙеке, тимәк, тамырҙары ла, ғүмере лә был ҡарағастарға лайыҡ. Ситдиҡ ҡарт та - Ташлыйылғаның мәғрур уҙаманы, асабаһы. Бөйөк Ватан һуғышына тиклемге, унан һуңғы бөтә ауырлыҡтарҙы татып үҫкән тыл һәм хеҙмәт ветераны ине. Бәләкәйҙән атаһына эйәреп, артелдә эш башланы, үгеҙ егеп, урмандан ағас ташыны, бынан тыш, сайыр ағыҙҙы, хат ташыусы булып та эшләне, ун ете саҡрымдағы Поляковка ауылынан аҙыҡ-түлек килтерҙе... Ә пенсияға сыҡҡансы ана шул Йәнекәйҙең йәнен - урман, йылғаларын һаҡланы. Егерь булды. Тауҙың итәгендә посадка булып үҫкән шыршы-ҡарағайҙар уның ғүмеренең бер иҫтәлеге булып, ана ҡалай ғорур баҫып тора. Ә был йәшәйшәр ҡарағастарҙы ул күҙ ҡараһы кеүек күрҙе, һис кемгә тейҙермәне, берәй ауылдашы үлеп-нитеп китһә, йәшерәктәренән генә бура буратты. Ул саҡта унан һорап та тормаһылар инде, ауылда йолаһы шулай булғас, килерҙәр ҙә бер бөртөк кенә ҡарағасты ауҙарырҙар ине. Ғәйеп түгел, кирәкһенсә, бер сауап һаналыр ине был балта һелтәнеү. Артығына теймәйҙәр һәм йәшәйшәрҙәргә ҡул һонмайҙар. Быныһы гонаһ улайһа.

Хәҙер бына сират үҙенә лә етте. Яратҡан ейәне олатаһы өсөн уҡ кеүек төҙ бер йәш ҡарағастың ғүмерен өҙҙө. Тамырынан киҫелгән ағас һыҙғырып ергә гөрс итеп килеп ятты. "Арыу ирҙәр ана шулай һыҙғырып ауа", тиер ине был саҡта олатаһы. Фәнил үҫмер саҡта олатаһы менән йыш йөрөнө урманға. Хәҙер генә уның эшеҙлеге, эскелеге арҡаһында аралары йырағайҙы, юҡ, һыуынманы, бары олатаһы алдында уның абруйы юҡҡа сыға барҙы, ә ул яҡын кешеһе алдында үҙенең "хәйерһеҙ"легенән оялды һәм шуға ситләште. Мәктәпте бөткәс, артабан уҡыманы. Әрменән ҡайтҡас, леспромхозда ябай эшсе булып һин дә мин эшләне ул, хатта үҙен маҡтайҙар ҙа ине, тик Үҙәктән килгән "Деревопром" тигән ниндәйҙер корпорацияһы был тирәләге урмандарҙы үҙ ҡулына алғайны, леспромхоз да бөттө, Фәнил дә, шул уҡ Шамил, Рәүеф кеүек класташ дуҫтары ла, башҡалар ҙа эшһеҙ ҡалды. Урман эшенә бәйле кәсеп асып шөғөлләнергә ниәтләп тә ҡарағайны был өс дуҫ, тик документтар тултырып, баштары ҡатты, унан бигерәк әлеге "Деревопром"дан рөхсәт ала алмай, ярты юлда туҡтап ҡалдылар, аҙаҡ бөтөнләй ҡул һелтәнеләр. Нисек кенә булмаһын, ошо заман буранында юл таба алмай ҡалды Фәнил, Шамил, Рәүеф атлы утыҙҙы ҡыуған Ташлыйылға ирҙәре. Ана шулай аҙашып ҡалыуын бик өнәп етмәне олатаһы ейәненең.

"Мин үлгәс, улым, был Йәнекәйгә ҡарағас алырға менерһең. Билеңдә балта булыр. Ағас һайлағанда һылыу ҡарағас һайлама минә, үҙем кеүек әрнеҙерәген, йыйырсыҡлыһын һайларһың, йәме", - тип аңғарта торғайны урманда йөрөгәндә олатаһы. Эй, унан




һуң күпме йылдар үтте, күпме ҡарағастар буй еткерҙе, күпмеһе һыҙғырып ауҙы. Бөгөн бына Ситдиҡ ҡарттың да "һыҙғырыр" ваҡыты етте. Килдең дә, ауҙарҙың да, бураның да, ҡәбергә ҡуйҙың ғына түгеллеген Фәнил күңеле менән аңлай, бында ата-бабаларҙан килгән оло мәғәнә барлығын да төшөнә ул. Шуға ла, "Ҡайныныһын бысһаҡ та булмаймы ни, барыһы ла бер ағас инде", тип торған Шамилды аптыратып, башын артҡа сөйөп, бейек ҡарағастарҙы оҙаҡ ҡарап йөрөнө ул. Ҡайырҙарын һыйпап, ағас йылыһын да тойоп торҙо. Һәм шуларҙың береһен... олатаһына оҡшатты. Эйе, эшләпәһен ҡырын һалып ҡына, аҡ мыйығы аҫтынан ғына йылмайып торған олатаһына оҡшатты. Һәм мотобысҡыһын ҡабыҙҙы. Һыҙғырып ауҙы ағас, арыу ирҙәр кеүек. Сайыр еҫе алды урманды. Төмәздең өҫтөнә ҡарағас энәләре менән тулышҡан йомшаҡ ерҙе һалды, тамырҙан килгән һут май ҡояшында ялтырап, кибеп ятмаһын, тигәндер. Урман эшен белгән егеттәр тиҙ уҡ эштәрен бөтөрөп, мәйет зыяратҡа килеп етмәҫ борон уҡ, бураны ылау менән тәгәйен ҡәбер янына килтереп ҡуйғайнылар инде.

* * *

Ситдиҡ ҡарттың йыназаһынан һуң, өс дуҫ - Фәнил, Шамил, Рәүеф - хәйергә төшкән аҡсаға магазиндан ике шешә араҡы алғас, Ҡағы йылғаһы буйына төшөп, тамаҡ сылатты. Ҡартты ҡәҙерләп иҫкә алды, урыны йәннәттә булыуын теләне. Әнер төшкәс, әсәһе дауаханала ятыу сәбәпле, аулаҡ булып ҡалған Шамилдарҙың өйҙәренә ҡайттылар. Унда таңға тиклем "хәтер кисе" дауам итте. Иртән торғас, баш төҙәтерлек рәттәре юҡ ине һәүректәрҙең, эшләмәгәс, кем һиңә килтереп бирһен. Элек ҡай саҡ Фәнил олатаһынан һораштырғылай ине лә, бөгөн инде ул да юҡ.

- Бөттө. Йә, нишләйбеҙ? Табырға кәрәк ине. - Фәнил-Федя мығырҙаны, икмәк ҡатыһын сабый кеүек имергә тотондо. - Былай түбәгә ҡарап олоп ятһаҡ, мотор туҡтаясаҡ минең.

Шамил-Шома ҡапыл ҡалҡынды ла һалмаҡ итеп бейергә тотондо. Тәүҙә аҡҡош булып осто, һуңынан бөркөт булып күккә атылды булыр, аҙаҡ бер аяғын бөкләп, сатанлап һикергеләне лә, тигеҙлек һаҡлай алмай, иҙәнгә йығылып китте.

- Бер идея бар ул башта, - тине лә оҙаҡ түбәгә ҡарап ятты. Рәүеф-Рафа түҙмәне, енелсә тегенең аяғына типте:

- Йә, нарығың бәрәсләйме, юкмы?

"Бейеүсе" ишетһә лә, иғтибар итмәне, тын ғына шиғыр һөйләргә тотондо. Шул тиклем тыныс һәм талғын һөйләне, хатта эшнәләре тауыш-тынһыҙ ултырҙы. Тыңланылар ҙа буғай.

*- Күргәнем бар минең*
*аяҡһыҙҙар бейегәнен*
*45-тә - Еңеү көнөндә.*
*О, ул бейеү! Ул ажарлы бейеү*
*Күҙ алдымдан китмәй бөгөн дә.*
*Ышанмайым: өҙөлөп ҡалған аяҡ*
*Онотолалыр яйлап, тигәнгә.*
*Йөрәк тетрәй, туҡ-туҡ һуғылғанда*
*Ағас аяҡ ағас иҙәнгә,* - Шамил тынды ла һаман түбәгә ҡарап ятыуын белде.

- Шиғыр ҡайғыһы берәүҙә, - Рафаның йәне көйөп китте.

- Кемдер шешәлә таба терәүҙә, - Шамил тороп, муллалар кеүек аяғын салып ултырҙы ла Фәнилгә ҡараны. - Олатайыңдың тимер аяғын ҡәбергә бергә күмдегеҙме?

- Бергә инде, бар ғүмере шул аяҡта үтһен дә, нимәгә ул һиңә? - Фәнил икмәк ҡатыһын һурыуын дауам итте.

Шамил буш шешәне тотоп, иҙәндә әйләндергеләп алды:

- Бар идея шунда ине. Музейға алып барып тапшырғанда, Мостафа ҡарт, моғайын, бер сәмәйгә алыштырыр ине уны, протезды.

- Тимер аяҡ, тип ҡәбер соҡоп йөрөмәсбеҙ бит инде, - Рафа көләмһерәп ҡуйған булды.

- Тамаҡ ҡәбергә лә төшөрә, туған. Ә ҡул таяғын ҡәбергә һалмағанһығыҙҙыр әле? - Шамилдың нурһыҙ күҙҙәрендә нурҙар уйнап китте.

- Юҡсы, аптырайһыңмы әллә, ҡәбергә таяҡ һалырға йөрәрме ней беҙ, үҙем һарайҙың мөйөшөнә һөйәп ҡуйҙым.

- Булды. Шул етте, ошо таяҡты музейға һатабыҙ. - Шамил һикереп торҙо. - Шул, башҡаса юл юҡ. Ситдиҡ бабайымдың рухы, моғайын, шат ҡына булыр.

Өй эсендә йәнлелек һиҙелде. Стаканға оҙаҡҡа ҡунған себен дә, хәрәкәткә килеп, быҙылдап һөйөнөслө тауыш сығарҙы, түбәләге лампочкаға ҡунды. Шамил, хужа булараҡ, бойороҡ биреүҙе кәрәк тип тапты:

- Беҙ Федя менән йөрөп киләбеҙ, ә һин, Рафа, картуф турап, анау табаға һал. Май булмаһа, һыуҙа "жарить" ит. Закуска һинән. Беҙ изге эш менән йөрөп киләбеҙ.

Егеттәрҙең һәр береһенең ҡушаматы бар ине. Рәүеф ысынлап та Рафа - башҡа килгән яфа, улай зыяны ла, шулай уҡ файҙаһы юҡ уның, яфанан Рафаға әйләнде бына. Шамилды бәләкәй саҡта "Шәм" тип йөрөттөләр. Хәҙер күптәр Шома тиҙәр. Ә Фәнилде урыҫсалап Федя тип ебәрәләр. Был законһыҙ исемдәренә үҙҙәре лә күнегеп бөткән.

Фәнилдең ата-әсәһе күрмәһен өсөн, теге икәү картуф баҡсаһы артынан ҡасып-боҫоп тигәндәй һарайға барып инде. Күпте күргән ҡул таяғы урынында, һарай мөйөшөндә, һөйәлгән килеш төҙ генә баҫып тора ине. Фәнил ҡалтыранған ҡулдары менән таяҡты һаҡ ҡына ҡулына алды, әйтерһең, төшөп китһә, быяла кеүек селпәрәмә килә инде. "Бир", тине Шамил, ҡулына эләккән иҫке тоҡҡа урарға йыйыныуын белдерҙе.

- Ат итеп сабып йөрөргә шәп был таяҡ, - ялтыр тотҡаһын тотоп таяҡты ике бот араһына ҡыҫтырҙы ла ат булып кешнәп ебәрҙе Фәнил. Шунан ҡапыл: - Әллә бирмәй торайыҡмы? Бынау ере йылы ғына, ышанмаһаң, тотоп ҡара, - ул таяҡтың ялтыр тотҡаһын Шамилға һондо. Үҙе таяҡтың аҫҡы өлөшөн ысҡындырманы.

- Һе, йылы инде, тотоп торҙоң да. Һинең йылың, бир, киттек. - Шамил таяҡты тартты, Фәнил ысҡындырманы.

- Олатайҙың ҡулы йылыһы, мин беләм, тояҡм даһа. Шул йылы. Хатта ҡулының еҫе лә шул килеш, махрай менән дарыу тәме.

Шамил, аптырап, таяҡты ысҡындырҙы:

- Нишләйек һуң әтеү? Һин конкретно әйт, таяҡ йәл, тиң дә ҡуй, - асыуы ҡабарҙы.

Фәнил таяҡты ҡосаҡлап ултыра бирҙе. Һарайҙы иңләп тегеләй-былай йөрөгән Шамил нишләргә белмәне. Фәнилдең күңелен ул, ташҡа әйләнгәндер, тип уйлай торғайны. Хатта олатаһын ҡәбергә төшөргәндә лә, ләхеткә һалғанда ла бер күҙ йәше сығарыу түгел, уф та тимәгән дуҫының бөгөнгө сәйер ҡыланышын аңламаны. Эстән һыҙлана бахыр. Тик хәлен аңларға теләмәне, уны шәп идеяһының юҡҡа сығыу ихтималлыры борсоно. Иҫке бер ағас таяҡҡа иҫе китеп ултыра, аңһыҙың. Тынлыҡта һәр ваҡыттағыса уға ярҙамға ҡасандыр мейегә һеңеп ҡалған шиғыр юлдары килә. Улар ғына тынлыҡты ла, бушлыҡты ла тултыра төшкәндәй.

*- Тыңла, улым,- тине олатай,-*
*һүҙҙәремде алсы артмаҡҡа:*
*ҡайт ауылға, ҡайтһаң яҡшы ат менән,*
*тик атланып ҡайтма таяҡҡа-а,* - һуңғы һүҙҙәрен һуҙҙы ла дуҫы янына ултырҙы.

Фәнил таяҡты иплә генә итеп ике усына һалды ла уға һуҙҙы:

- Юҡ, таяҡ йәл түгел, олатай йәл, юҡҡа үлгән.

- Ҡартайғас, кеше үлә, киттек. Уның ҡарауы, таяғы музейҙа һаҡланасаҡ. Ә беҙгә ҡартлыҡ килеп етмәйәсәк.

- Нишләп?

- Әтеү музейҙа таяҡтар күбәйеп китер, тип ҡурҡам. Ярты юлда туҡтап ҡаласаҡ. Мыжыҡ ҡартлыҡты әйтәм, беҙ йәшләй генә һинең менән тамуҡҡа юлланырбыҙ, ахыры.

- Ахыры, ахыры, - тип үсекләп ҡабатланы Федя дуҫын.

**(Дауамы бар).**

КӨЛӨП АЛАЙЫҠ!

# ШИҒЫРҘАРҘАН...

## шулай мәҙәк таба инем

**Бала саҡтан шиғыр уҡырға яраттым. Ағай-апайҙарымдың китаптары һалынған фанера йәшникте атайым ни өсөндөр өй ҡыйығының эсенә ултыртып ҡуйғайны. Мәжит Ғафури, Ғабдулла Тукай, Бабич, Фәлимов Сәләм һәм башҡаларҙың шиғырҙарын ҡабат-ҡабат уҡып, бәгзе ваҡыт сәғәттәр буйы ана шул ҡыйыҡ эсенән сығышманым. Китаптарҙан тыш, ағайымдар "Ағиҙел" журналдарын да ана шул йәшниккә йыйып барған. Мәҙәк шиғырҙарҙы уҡыуы айырыуса оҡшай торғайны. Үҙем дә һиҙмәҫтән, күптәрен ятлап та алғанмын. Ошо көнгәсә улар хәтеремдә. "Шаяртыудиялар" рубрикаһында шул дәүерҙәге шағирҙарҙың бер-береһен мәрәкәләүҙәрен көлә-көлә уҡыйым да, унан өйгә инеп, атайыма, әсәйемә уҡып күрһәтәм. Шуларҙың нығыраҡ иҫтә ҡалғандарын ошо мәҡәләмә индермәк булдым. Гәзит уҡыусылырыбыҙҙың да күңеленә ятыр, тигән ышаныстамын.**

* * *

Яҙыусылар мөрәжәғәт иткән жанрҙарҙың әленән-әле үҙгәреп тороуы айҡанлы бер-береһен шаяртыуҙарын иҫләйем. Әнғәм Атнабаев ағайҙың шиғыр яҙыуын бер аҙ һирәкләтеп, драма яҙырға тотоноп киткән саҡ булғандыр инде. Икенсе бер шағир (авторын хәтерләмәйем) уға былай тип яҙған:

*Өйҙәш булып кергән ине*
*Атнабайға - Атнабай.*
*Шағирҙы ҡыуа өйөнән*
*Драматург, үәт малай!..*

Ә элегерәк йырҙар яҙып, унан бер аҙ туҡталып торған Ҡадир Даянға әлеге шағир ошо шиғыр юлдарын бағышлаған:

*Хәҙерге көнөм - яман.*
*Йәшәһен үткән заман!*
*Сөнки үткән замандарҙа*
*Йыр яҙған Ҡадир Даян.*

Хәким Ғиләжев жанрында әллә ни үҙгәреш булмағандыр, күрәһең. Уға арналған шиғырҙы ошолай тип хәтерләйем:

Хаким, "каким ты был, таким и остался..."

Икенсе бер һанда Назар Нәжмиҙең "Яуа ҡарҙар" исемле китабы сығыу айҡанлы яҙылған шаян шиғырҙағы ошондай юлдар иҫемдә ҡалған:

*Йылдар уҙа, уҙа йылдар,*
*Ҡарҙар яуа, яуа ҡарҙар,*
*Яҙа шиғыр, шиғыр яҙа*
*Назар Нәжми, Нәжми Назар...*

Әхнәф Харис докторлыҡ диссертацияһын яҡлағас, уны:

*Әхнәф Харис, һүҙен уҡтыр,*
*Шуға күрә булдың доктор.*
*Артабан да шулай һуҡтыр,*
*Иптәш доктор!* - тип шаяртҡайнылар.

* * *

Шәйехзада Бабичтың "мөтәшағирҙарға" (шағир булырға маташыусыларға) төрттөрөп яҙылған дүрт юллыҡ шиғырҙары яҡшы хәтеремдә:

*Әй, Ғалимйән Аҡчурин,*
*Шөһрәт күҙенде ҡыҙҙыра,*
*Әммә бер ботлап һүҙенә*
*Ярты мыҫҡал тоҙ керә...*
*Әй, Әхсән Ҡормашый, выж!*
*Матбуғатта тормаһа,*
*Ят ауылда бул зыялы (файҙалы),*
*Бер һабаһы, тырмаһы...*
*Әй, йыуан ҡорһаҡ,*
*нәҙек аяҡ Ғәйҙәний,*
*Елгә ҡаршы борсаҡ*
*һибеүҙән файҙа ни?..*

* * *

"Ағиҙел" журналы һандарының береһендә ике шағирҙың (үкенескә, кемдәр икәне хәтеремдә ҡалмаған) бер-береһен тыуған көндәре менән ҡотлап яҙышҡан шиғырҙарын да иҫләйем. Береһе икенсеһенә былай тип яҙа:

*Дуҫҡай, һиңә теләйем мин*
*алтын тәхет.*
*Тәхетеңә ҡунһын ырыҫ,*
*бөтмәҫ бәхет!*
*Тағы һиңә теләйем мин өс кәләш.*
*Етмәһә, дүртенсегә тағы йәрәш!*
*Тирә-яғың солғап алһын бала-саға,*
*Өйөңдә туҡталмаһын*
*ыҙғыш-талаш...*
*Балаларыңды тыя торғас,*
*башың ҡатһын,*
*Күҙҙәреңдән йылға булып*
*йәштәр аҡһын!*
*Өнөрәйеп ике күҙең эскә батһын!..*

Ә инде уның тыуған көнө килеп еткәс, икенсеһе быныһына ошолай яуап биргән:

*Байрамыңды шартлатып ҡотлайым,*
*туған!*
*Һине саҡырырға бөгөн тоҙлайым*
*һуған...*
*Килде байрам, эс тә айран -*
*тышҡа сыҡ...*
*Эй, яҡын дуҫым, ҡыуан,*
*эттән тыуған!..*

* * *

Мәктәптә уҡығанда, һәр төрлө шиғыр һәм йырҙарҙың юлдарын алыштырып уҡып, класташтарымдың күңелен аса инем. Бер куплеттың беренсе юлына икенсе куплеттың икенсе юлын ҡушып, унан тәүгеһенең өсөнсө юлын һәм икенсеһенең дүртенсеһен ҡушып уҡыһаң, шиғырҙың ритм һәм рифмалары һаҡланып ҡала, әммә мәғәнәһе үҙгәрә. Ҡайсаҡ бик ирмәк булып килеп сыға... А.С. Пушкиндың "Кышҡы кис" шиғыры һәр кемгә лә таныш бит инде. Ана шуның рус телендәгеһе менән башҡортса тәржемәһен бергә ҡушып "гибрид" яһай инем:

*Буря мглою небо кроет,*
*Томалап күкте ҡаплай,*
*То как зверь она завоет,*
*Йә бала төҫлө илай.*
*То по кровле обветшалой*
*Ҡапыл һаламда шаулай,*
*То как путник запоздалый*
*Һунға ҡалған юлсылай...*

Башҡортсаһын башта ҡуйып һөйләһәң дә ҡыҙыҡ килеп сыға:

*Буран ҡарҙарҙы өйөрә*
*Вихри снежные крутя,*
*Йә ул йыртҡыстай үкерә,*
*То заплачет как дитя...*

* * *

Баштараҡ килтергән ике шағирҙың әйтешкәне һымаҡ, бер нисә йыл элек Әхмәр Үтәбай менән Дамир Шәрәфиҙең дә бер-береһенә шиғри әйтешеүҙәре гәзитебеҙҙә сыҡҡайны. Шуны кинәнеп уҡығайным. Шағирҙарыбыҙ бына шундайыраҡ яҙмалары менән әленән-әле күңелдәребеҙҙе асып торһа, килешеп тә ҡалыр ине...

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

**Боронғо Русь халҡы Яңы йылды яҙ айында билдәләгән, яҙғы көн менән төндөң тигеҙләшеүе Тәбиғәт яңырған мәл тип иҫәпләнгән. Яңы йыл ағасы - ҡайын, урыҫтарҙа ул йәшәү, мөхәббәт һәм именлек ағасы. Яҙын иң беренсе ҡайын ағасы бөрөләнә, ул йән биреүсе көстәр сығанағы, яман көстәрҙе ҡыуа һәм сәләмәтлек килтерә. Әлбиттә, уны ҡырҡырға ярамаған.**

# ШЫРШЫЛАРҘЫ КИҪМӘЙЕК!

1699 йылда Петр I Рәсәйҙә Юлий календарына күсерә. Яңы йыл боронғо славяндарса көҙгә көн менән төн тигеҙләнгән мәлдә түгел, ә Европаса 1 ғинуарҙан башлана. Петр I шулай уҡ йыл иҫәбен дә үҙгәртә, 1700 йылда Рәсәйҙә яңы йола барлыҡҡа килә: Германия протестанттарынан күреп, шыршы ағасын ҡырҡып, йорт-ҡураны биҙәргә бойорола. Был ғәҙәтте халыҡ оҙаҡ ҡабул итмәй, сөнки славяндарҙа шыршы үлем ағасы һаналған, ул ерләү йолаһында ҡулланыла (шыршы ботаҡтарын үлгән кеше өйөндә иҙәнгә түшәйҙәр, веноктар яһайҙар). Үҙ-үҙенә ҡул һалған кешеләрҙе йәҙ түбән һалып, ике шыршы төбөнә күмеү ғәҙәте лә булған. Ҡайһы бер яҡтарҙа өйгә яҡын урында шыршы ағасын ултыртыу тыйылған: ғаиләләге ир-егеттәргә үлем килтерә, тип ҡурҡҡандар. Уҫаҡтан йорт һалмаған кеүек, шыршыны ла төҙөлөштә ҡулланырға рөхсәт ителмәгән. Бына шундай ышаныуҙар була тороп та, указға ярашлы, һәр кем тотош шыршы ағысын ҡырҡып, өйгә ултыртырға, йәки уның ботаҡтары менән йорт ҡапҡаһын, урамдарҙы, юлдарҙы, трактир ҡыйыҡтарын биҙәргә тейеш була. Был йолаға халыҡты күндереү өсөн Петр I тарафынан бик ҡаты саралар күрелә һәм шыршы Яңы йыл байрамының төп символына әйләнә.

Ҡырҡылған шыршы бер аҙна тирәһе, йәки унан саҡ ҡына оҙағыраҡ йәшәй. Тамыры булмағас, ул энергияны тирә-яғынан ала. Шыршы метр ярым булып үҫһен өсөн ун йылдан ашыу ваҡыт талап ителә, уны ҡырҡып алыуҙы Йыһан энергияһын боҙоу тип кенә түгел, үҙебеҙҙең тынды ябыуға тиңләргә кәрәк. Сөнки беҙ һулаған һауаның таҙалығы ошо ағас бүлеп сығарған кислородтан тора. Бөтә Рәсәй масштабында ҡараһаҡ, бер төнгә өй эсен биҙәү өсөн тәбиғәткә килтерелгән зыян кимәлен иҫәпкә лә алып тормай, тотош урмандарҙы ҡырабыҙ бит. Ҡара аңлы халыҡ түгелбеҙ, заманда да артта ҡалмағанбыҙ үҙебеҙ, тимәк, быңдай насар йоланан баш тартырға ваҡыт, йәмәғәт!

Әлбиттә, Яңы йыл байрамын үткәреү ғәҙәткә ингән. Балалар Ҡыш бабайға ышанһын, йыл алмашынғанда һәр кем мөғжизә өмөт итһен, әйҙә. Ни бары бөтөнләй беҙҙең асылға, ышаныстарға тап килмәгән сит ил йолаһының бер кире күренешен генә үтәмәҫкә кәрәк. Беҙ бит өйҙәребеҙгә яһалма шыршы ла ҡуя алабыҙ.

**Әйткәндәй, ололар һөйләүенсә, шыршы - башҡорттарҙың ағасы ул. Беҙҙең халыҡта шундай легенда ла бар: шыршы әнәһенә кеше исемдәре яҙылған. Кемдең исеме яҙылған әнә ҡойолоп төшә, шул кешенең ғүмере өҙөлә. Уйлаңырға урын бармы? Нисек кенә булмаһын, әйҙәгеҙ, шыршыларыбыҙҙы киҫмәйек һәм киҫтермәйек!**

ӘБИӘЛИЛ МӘҘӘКТӘРЕ



### "Елкәнән ҡолап төштө"

Ауылда йәшәүсе Бибигөл апай ҡалалағы ҡыҙы менән кейәүенә ҡунаҡҡа килгән. Ҡараһа, ни күрһен, ҡыҙының бите күгәргән, ти. Ҡәйнәһе бының сәбәбен кейәүенән һораған икән, тегеһе: "Кыҙың оялмай ҙа елкәгә менеп ултырам, тигәйне, ҡолап төштө лә китте", - тигән. Кейәү "шәп", ҡулы менән эшләгәндә теле менән шымаланы ла ҡуйҙы.

### По пути

Баймаҡтан Өфөләгә ҡыҙы менән кейәүенә ҡунаҡҡа Гөлйыһан инәй килә. Килеп инеү менән фатирҙа тәртип урынлаштыра башлай. Әйләнгән һайын кейәүенә: "По пути сүпте түк, по пути магазинға инеп сыҡ", - тип кенә тора ти был. Бер көн кейәүе менән ҡыҙы әрләшеп китә. Йоҙроҡ та "татыта" кейәү кәләшенә, ҡыҙын яҡлап килеп ҡыҫылған ҡәйнәһенә лә өләш төшә. Аҙаҡтан: "По пути ғына булды, ҡәйнәм", - тип ҡуйҙы ти кейәү.

### Кәзә ни, ат ни...

Заһиҙә инәй менән Хәббөтдин бабай ғүмер буйы кәзә аҫыранылар. Ҡыш көнө бәрәстәр өйҙә тора. Бер көндө 4-5 йәшлек ейәнсәрҙәре килә, былар нимә ул, тип бәрәстәрҙе тәртәп күрһәтә. Өләсәһе: "Былар ни олатайыңдың аттары", - тип яуаплай. Урамда осраған бер кешегә ҡыҙ олатаһының аттары тураһында һөйләп ҡайта. Кеше аптырай, инеп күреүселәр ҙә була. Шунан алып кәзә бәрәстәренән, Хәббөтдиндең аттары, тип көләләр.

### "Ҡасан үләһең?"

Миңъямалдың ҡолағында алтын алҡаларҙың ялҡылдап тороуына ейәнсәре бик ҡыҙыға. Етмәһә, өләсәһе: "Мин үлгәс, был алҡалар һиңә булыр", - тип тә ебәрә. Ошонан башлап ҡыҙ көн дә өләсәһенә килә лә: "Үлмәнеңме әле?" - тип һорай икән. Хәҙер үҙе ҙур урында эшләй, өләсәй ҙә иҫән. Был ваҡиғаны иҫкә алыуҙы тыя ҡыҙ, алтын алҡалар ҙа уның ҡолағына күскән күптән. Бала саҡ, үлем менән йәшәүҙе белмәгән саҡ, нимә генә әйттермәй телеңдән.

### "Лампочканы йәлләйем"

Бибикамал еңгә һыҡмырлығы менән дан алған кеше. Бер бөртөк улынан да ризыҡ йәлләй. Унда сәй эсергә йәки ҡунаҡҡа барырға ҡыйынһыналар, ашағаныңды ҡарай ҙа тора. Бер көндө тәҙрәләрендә ут күренмәгәс, күршеләре хәл белергә инә. Ни күрһен, Бибикамал өй эсендә фонарь яҡтыртып, аш бешереп йөрөй. Күршеһенә: "Бынау лампочканы йәлләйем, сәғәттәр буйына яна, ул да һиҙланалыр ул", - тигән ти. Һыҡмырҙың һәр эшкә яуабы әҙер, йәҙә лә ситаймай, теле лә тотлоҡмай.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ВИРУС...

## һыуыҡҡа бирешмәй

■ Төндә насар йоҡлаһаң, йоҡларға ятыр алдынан физик күнекмәләр эшләп ал, тип кәңәш итә ғалимдар. АҠШ-тың Йоҡо милли фонды үткәргән һорау алыуҙарҙа ҡатнашыусылар яуаптары буйынса бер нисә төркөмгә бүленгән: уларҙың ҡайһылары күнекмәләрҙе даими яһаған, ҡайһылары еңелсә генә спорт менән шөғөлләнгән, ҡайһылары бөтөнләй ҡыбырларға яратмаған. Кем ниндәй ҙә булһа күнегеү төрө яһаған, улар яҡшыраҡ йоҡлаған. Кемдәрҙер матур төштәр күреүен дә билдәләгән. Көнөнә 10 минут ҡына йәйәү йөрөү ҙә йоҡоноң сифатын күпкә яҡшырта, ти белгестәр.

■ Әгәр ҙә баланы ҡәтғи рәүештә бер үк ваҡытта йоҡларға һалһаң, уның тән ауырлығын нормала тоторға мөмкин. Бындай режимлы үҫмерҙәрҙә һимереү йыш осрамай. Сәбәбе ябай: көн тәртибе шылып йөрөү һәҙәмтәһендә йоҡо туймау һимереүгә килтерә. Пенсильвания университеты хеҙмәткәрҙәре әйтеүенсә, бала сәләмәт булһын өсөн уның йәшәү режимы булырға тейеш. Тикшеренеүҙәрҙә 5 йәшкә тиклемге 2 меңдән ашыу бала ҡатнашҡан. Уларҙы ҡайһы ваҡытта йоҡларға ятыуҙарына ҡарап төркөмдәргә бүлгәндәр. Һынауҙар 10 йыл буйына барған. Асыҡланыуынса, һәр өсөнсө бала ғына үҙ йәшенә тап килгән режим менән йәшәгән. Әгәр ҙә режим булмаһа, бала аҙыраҡ йоҡлаған һәм 15 йәшкә еткәс, унда һимереү күҙәтелгән. Педиатрҙар иҫкәртә: 5 йәшлек бала 18:45 һәм 20:15 ваҡыт арауығында йоҡларға ятырға тейеш. 12 йәшлек балаларға, мәҫәлән, 20:15-21:45 сәғәттә йоҡлау яҡшыраҡ.

■ Ҡыш юғары энергияға эйә ризыҡтар - аҡһымға, углеводҡа бай аҙыҡтар ашағыҙ. Ҡулдар, аяҡтар, бит, баш, ҡолаҡтар һәм танауҙы өшөтөүҙән һаҡларға. Өшөгәнһегеҙ икән, башта йылы һыу эсегеҙ. Организмды эстән йылытыу мөһим. Шунан һуң ғына йылы һыу менән йыуынырға, өшөгән тирене ҡоротҡансы һөртөргә. Тире ағарып, өшөүҙең билдәләре күренә башлаһа, табипҡа мөрәжәғәт итергә. Өшөү - тын юлдарына ла зарар килтерә. Һыуыҡ һауа менән тын алыу бронхит, үпкәләр шешеүенә, ауыр вируслы-бактериаль ауырыуҙар үҫешенә килтерә ала. Көн нык һыуынһа, вируслы ауырыуҙар йоҡмай тигән хәбәр уйҙырма. Һалҡын һауа вирустарҙы юҡҡа сығармай, бары тик һыуыҡтарҙа кеше магазиндарға, башҡа йәмәғәт урындарына һирәгерәк сыға. Һөҙөмтәлә, кешенән кешегә вирус йоғоу ихтималлығы кәмей.

■ Һөттөң составындағы кальций уны кеше сәләмәтлегә өсөн файҙалы итә. Үҙәк Флорида университеты ғалимдары һөттөң зыянын асыҡлаған, улар һөт эсеү менән ревматоидлы артрит араһында бәйләнеш бар, тип иҫәпләй. Һөттә, һыйыр итендә осраған үҙенсәлекле бактерия төрө ошо ауырыуға килтерә. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашҡан артрит менән сирләгән 100 пациенттың 40 проценты был бактерия менән зарарланған булған. Бынан тыш, был микроорганизмдар Крон ауырыуы хәүефен арттыра. Шуға ла бындай сирҙәр менән яфаланған өлкән йәштәге кешеләргә һөттө һәм һыйыр итен аҙыраҡ ҡулланырға тырышырға кәрәк.

ЙОЛА ТОТҠАН ЯҘЛЫҠМАҪ!

# ҠЫҪЫР ЙҮРМӘ, ЙӨКЛӨ ЙҮРМӘ...

**Башҡорт халҡында һәр бер йоланың, һәр байрамдың үҙенә генә хас маҡсаты бар. Минең өләсәйҙәрем беҙгә бик күп риүәйәттәр, әкиәттәр һөйләй, йомаҡтар ҡоя инеләр. Йолаларҙы ла уйнап та, эшләп тә күрһәтәләр ине. Хәҙер үҙем оло йәштәмен, белгәнемде ейән-ейәнсәрҙәремә, йәштәргә өйрәтергә тырышам. Аҡһары ауылы ағинәйҙәре менән ошо көндәрҙә тағы ла бер матур йоланы иҫкә төшөрҙөк әле. Йүрмә байрамы тип атала ул.**



Йүрмә - ул әллә ниндәй оло ризыҡ түгел. Борон ҡатын-ҡыҙҙар йүрмә байрамдары үткәреп, үҙ-ара аралашып, күңел асып алған. Ул, ғәҙәттә, йәйләүҙә, һарыҡтар һимеҙ саҡта үткәрелгән. Һарыҡ һуйылып, туналғандан һуң, эс-ҡарыны төшөрөлә. Ас эсәген һауып алғандан һуң (айырып тартып сығарыуҙы "һауыу" тиҙәр), уны һыу йүгертеп яраһың. Малдың башҡа ҡарын-эсәген дә таҙартып, тоҙ менән ышҡып, яҡшылап йыуаһың.

Йүрмә ике төрлө була. Селтәр майҙы (һарыҡтың эс майы) оҙон таҫма итеп ҡырҡаһың. Уны ас эсәк менән ҡушып, сынйырлап үрһәң, ҡыҫыр йүрмә килеп сыға. Эс майын туҡ эсәккә ҡушып үрһәң, быныһы йөклө йүрмә тип атала. Эсәктәрҙе ошолай майлап үргәс кенә бешекләйһең.

Йүрмәгә ҡаҡланған ҡаҙы, оло малдың күтәне, туҡ эсәге, бәйән (таҡыя янында килә) ҡушып бешерелә. Өҫтәлгә сығарғанда тәрилкәләргә йөклө йүрмә, ҡыҫыр йүрмә һалып, өҫтөнә түңәрәкләп ҡырҡылған ҡаҙы, күтән теҙәһең.

Асылда, был йоланың төп маҡсаты шунда - унда еткән ҡыҙҙарҙы һынайҙар. Ҡыҙҙары булғандар байрамға ҡыҙы менән бергә килә. Уландар үҫтергән әсәләр иһә, уларҙы төрлө яҡлап һынай. Берәй ҡыҙҙы оҡшатһа, унан йүрмә һоғондороуын һорай. Ҡыҙ кеше йүрмә киҫеп алып, йә ҡаҙы, йә күтән киҫәге һалып, буласаҡ ҡәйнәһенә һоғондора. Иплеме, һоғондорған йүрмәһе самалымы - ошоно баһалаған буласаҡ ҡәйнә әйтемен әйтә. "Афарин, рәхмәт, ҡыҙым", тиһә, тимәк, ҡыҙ уға оҡшаны, ул әҙәпле, ғөрөф-ғәҙәткә ярашлы итеп үтте һынауҙы. Оҡшамаһа: "Һоғондорған йүрмәһе ауыҙыма һыйманы", тигән булып, ауыҙынан ипләп кенә алып, ситкә ҡуя. Быныһы инде ҡыҙға уға килен булыу насип түгел тигәндә аңлата. Әйткәндәй, ҡыҙҙар ҡыҫыр йүрмә ашамаған, уны ырыуҙан ҡалған оло ҡатындар ғына ашаған. Был табында мәҡәлдәр, табышмаҡтар әйтелә. Тәрбиә темаһына әңгәмәләр алып баралар, ҡымыҙ сиртеп, бейеп-йырлап ултыралар.

Борондан төрки телле халыҡтарҙа булған тағы бер аш-һыуҙы хәтерҙәргә төшөрҙөк. Үпкә үпкәләп ҡалмаһын тип, уны ла бешерәбеҙ. Башта төп үпкә көпшәләренә башланғыс биреп торған боғарлаҡҡа (трахея) һыу ҡойабыҙ. Уны алыштырып торабыҙ, был үпкә ҡандан таҙарһын өсөн кәрәк. Унан ошо боғарлаҡ аша һөт, йомортҡа, май ҡушып яһалған ҡатнашма ҡоябыҙ ҙа, һыуҙа 1 - 1,5 сәғәт самаһы бешерәбеҙ. Беҙҙә ул күптән онотолған ризыҡ, күптәргә бик оҡшаны.

Был байрамды үткәрергә ярҙам иткән Аҡһары, Яҡут ауылы ағинәйҙәренә, матди яҡтан ярҙам күрһәтеүсе Рауизә Хәмитоваға, фельдшерыбыҙ Нәйлә Солтановаға, район "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы рәйесе Тамара Малбаеваға, унын урынбаҫары Минзиә Ҡотлоәхмәтоваға рәхмәтлемен.

**Гөлсөм СӘЛИХОВА.**
**Көйөргәҙе районы.**

ҺЫЙЛАМАҒА ҺЫЙЫҢ БУЛҺЫН!

**Оҙайлы ялдар ваҡытында милли ризыҡтар әҙерләп, ғаиләгеҙҙе һыйлап алығыҙ әле. Һәр кем тәбиғи оҫталығы, тәжрибә кимәленән сығып, үҙенсә бешерһә лә аш-һыуҙы, Өфө районы Булгаково ауылында йәшәүсе Гөлназ МӘҮЛИХАНОВАның кәңәштәренә лә ҡолаҡ һалығыҙ. "Әсәйем Әбйәлил районы Таҡһыр ауылында клуб мөдире булып эшләне. Берәй байрамға әҙерләнгәндә бер төн эсендә 40-ҡа яҡын милли ризыҡ әҙерләй торғайны. Мин дә уның ҡул аҫтында йөрөп өйрәндем быларҙың барыһына ла", - ти бөгөн тотош республикаға аш-һыу оҫтаһы булараҡ танылған Гөлназ апай. Уның бауырһаҡтары Мәскәүҙән уҙып, Америкаға ла барып еткән хәҙер. Шулай итеп, иғтибарығыҙға оҫтабикәнән бауырһаҡ һәм итле гөбәҙиә рецебы.**



### Итле гөбәҙиә

Күрәгә менән йөҙөмдө ҡат-ҡат йыуып, турайбыҙ. Дөгөнө йыуып, ярым әҙер булғансы бешерергә, май, аҙ ғына тоҙ ҡушып болғатырға. Аҡ майҙы иретеп, бер аҙ майонез, тоҙ, сода өҫтәп, ҡамыр баҫабыҙ. Ҡамырҙың аҫҡы өлөшөн йәйеп, табаға һалғас, иң аҫтына һуған ҡушып ҡыҙҙырылған фаршты һалабыҙ. Унан һуң ҡатлап ҡыҙыл эремсек, йөҙөм, дөгө, бешкән һәм тураған йомортҡа, күрәгә, тағын дөгө һалабыҙ. Эслек әҙер булғас, аҡ май иретеп ҡоябыҙ. Ҡалған ҡамыр менән өҫтөн ябып, ситтәрен тотоп сығабыҙ. Өҫтөнә туҡылған йомортҡа һөртәбеҙ. Мейестә 45 минутта бешеп сыға.

### Бауырһаҡ

8 йомортҡаны яҡшылап туҡыйбыҙ. Ҡул менән туҡыһаң, тәмлерәк була, әммә ҡабаланыраҡ саҡта миксер ҙа ҡулланам. Бысаҡ осонда ғына сода, аш һеркәһе өҫтәгәс, йәйләп-йәйләп он һалабыҙ. Ондо ҡамырға һалыр алдынан ғына иләйем, кислородҡа байыған он ҡамырҙы яҡшы ҡабарта. Ҡамырҙы 10-15 минут баҫам, ни тиклем оҙағыраҡ баҫаһың, ул шул тиклем йомшағыраҡ буласаҡ, ауыҙҙа ирep кенә торасаҡ. Бауырһаҡҡа тигән ҡамыр шыйыҡ була. Уны онло таҡтаға өләшләп-өләшләп һалып, ҡулдар менән бер аҙ йәйеп, кәрәкле ҙурлыҡта киҫәбеҙ. Бысағығыҙға йәбешһә, ҡырҡыр алдынан уны онға манып алығыҙ.

Башта майҙы ҡайнатып сығарабыҙ. Майҙы гел һыуытып торорға кәрәк буласаҡ, шуға ла бауырһаҡ бешәсәк һауытыбыҙҙы һалҡын һыу һалынған ҙурыраҡ һауытҡа тығып алабыҙ. Бауырһаҡты өйөү өсөн сиропты түбәндәгесә әҙерләйем: 2 стакан шәкәргә ярты стакан һыу ҡойоп, һыу ҡайнап сыҡҡас, 4-5 ҡалаҡ бал өҫтәйем. Сиропты тәрилкәгә тамыҙып ҡарағыҙ, әгәр ағып китмәй икән, әҙер тигән һүҙ.

ЫШАНҺАҢ - ЫШАН

**Үтеп киткән йыл хужаһы хакимлыҡ итеүҙе Ҡабанға тапшыра. Уның төҫө Эттеке кеүек үк һары, символы ла уныҡыса - Ер билдәһе. Тотемдар алмашынһа ла, стихия, күреүебеҙсә, үҙгәрешһеҙ ҡала. Ҡайһы бер экстрасенстар был күренеште үҙҙәренсә - тормошобоҙҙоң әлегә үҙгәрешһеҙ ҡаласағына юрай. Ер стихияһы маҡсатҡа өлгәшеүҙә ныҡышмалылыҡ, эш һөйөүсәнлек талап итә. Шулай ҙа Ҡабан ҡабаланмаҫҡа оҡшай: яҙға тиклем тырнанып-ышҡынып, хыялдарға сумып ятыр-ятыр ҙа, март ҡояшы ерҙе йылыта башлау менән "еңдәрен төрөп", дәртле хорхолдап, эшкә лә тотонор. Көнсығыш мифологияһында Ҡабан - аҡса һәм байлыҡ смволы. Шуға ла ваҡ, тимер аҡсалар йыя торған һауыт та (копилка) йышыраҡ ҡабан рәүешендә эшләп сығарыла.**



# ҠАБАН ЙЫЛЫ - ҠАБАЛАН...

## өйләнеп йә байып ҡал!

Ҡабан йылы көнсығыш календарындағы 12 йыллыҡ мөсәлде тамамлап ҡуя, унан һуң икенсе цикл башлана. Ҡабан мәрхәмәтле һәм йомарт йән эйәһе, шуға күрә был йылда йыбанмаған һәр бер кеше үҙенең матди хәлен яҡшырта ала, ләкин аҡса күктән яумаясаҡ. Байырға теләһәң, ҡабан кеүек моронoң менән ер һөрөргә лә тура килеүе бар. Бынан тыш, Сусҡа һәйбәт әсәй һәм хәстәрлекле хужабикә лә. Яңғыҙаҡтар, уның был сифаттарын да файҙаланып ҡалырға ашығығыҙ: Ҡабан йылы никахлашыу, ғаиләле булыу, донъяға бәпестәр килтереү өсөн иң уңай осор иҫәпләнә.

Хәҙер Ҡабан йылының мөсәлдәге башҡа тереклектәрҙе сағылдырған йыл хужаларына мөнәсәбәтен асыҡлайыҡ: кемде нимә көтә?

**Сысҡан** (1948, 1960, 1972, 1984, 1996, 2008) йылы тыуғандарҙы Ҡабан йәберләмәҫкә тырыша: ни тиһәң дә, аҙбарҙа йыш ҡына күршеләш тә йәшәргә, бер табаҡтан ашарға ла тура килгеләй. Сысҡанға алдағыһын уйлап борсолмаһа ла була, йыл хужаһы дуҫы хаҡында хәстәрлек күрәсәк.

**Һыйыр** (1949, 1961, 1973, 1985, 1997, 2009) йылы тыуғандарға берсә - аҡ, берсә ҡара һыҙатта йәшәп алырға тура киләсәк. Тик бынын үҙ өҫтөнлөктәре барлығын да онотмағыҙ: проблемаларға баттым, тигәндә генә ваҡыт тиҙлеге һеҙгә тормоштоң яҡшы сәләмдәрен дә көттөрмәй генә еткереп торасаҡ.

**Юлбарыҫ** (1950, 1962, 1974, 1986, 1998, 2010) йылы тыуғандарға Ҡабан бар ишектәрҙе лә шар асып ҡуйыр. Көс еткеһеҙ пландар һәм бығаса булмаған ҡеүәт - Юлбарыҫҡа йыл хужаһынан бүләк шундай. Әйтерһең дә, Ҡабан Юлбарыҫтың һуңғы өс йылда уңмауын ана шулай аҡларға уйлай. Юлбарыҫҡа хәл иткес һикереш яһарға ғына ҡала. Йүнәлеш бирелгән: алға һәм бейеккәрәк!

**Ҡуяндар** ҙа (1951, 1963, 1975, 1987, 1999, 2011) Ҡабандың изгелекле мөнәсәбәтенә өмөт итә ала: айырыуса быларҙың "оя ҡороу" хәстәрлектәре, күсемһеҙ милек һатып алыу, ремонт-йыһазландырыу кеүек мәшәҡәттәре үҙенән-үҙе хәл ителгәндәй, хупланып ҡына торор.

**Аждаһалар** (1952, 1964, 1976, 1988, 2000, 2012) йыл хужаһын бер ни тиклем көсөргәнештә тота, ҡурҡыта, әлбиттә. Уның илтифатын яулар өсөн Аждаһаларға ығы-зығы һәм төрлө янъялдарҙан алыҫ йөрөргә, уның ҡарауы, бөтөн дәрт-дарман ялҡынын шәхси тормошто төҙөүгә йүнәлтергә кәрәк булыр. Йыл хужаһы Аждаһаларҙы ЗАГС тупһаһына илтәсәк тарихи осрашыуҙың мәшәҡәттәре менән мәшғүл буласаҡ.

**Йылан йылы** (1953, 1965, 1977, 1989, 2001, 2013) тыуғандарҙы Ҡабан бик яҡын күрмәй, шуға ла тәүҙәрәк уларҙы ныҡлыҡҡа һынап ала. Ниһайәт, Йыландарҙың аҡылы һәм сабырлығын күреп, йыл хужаһы асыуын мәрхәмәткә алыштыра. Һөҙөмтәлә йәй ахырына иң көслө хыялығыҙ ысынбарлыҡҡа әйләнер. Шулай ҙа халыҡ күп йыйылған урындарҙан алыҫ йөрөгөҙ һәм юл-транспорт хәүефенән һаҡ булығыҙ.

**Йылҡыларҙы** (1954, 1966, 1978, 1990, 2002, 2014) Ҡабан ҡанат аҫтына алып, ярҙам итеп тормаҡсы. Шулай ҙа үҙҙәренә лә "һабанға егелергә" тура киләсәк. Йылҡылар өсөн йыл хәүефе: аҡсағыҙҙы шикле кәсепкә һалып, эшләп тапҡанығыҙ алдаҡсы финансистар кеҫәһендә юҡҡа сығыуы ихтимал. Аҡсаға бәйле эштәрҙә һаҡ булығыҙ!

**Ҡуй йылы тыуғандарҙы** (1955, 1967, 1979, 1991, 2003, 2015) йыл хакимы айырым иҫәптә тотҡан иң яратҡандары исемлегенә индерәсәк һәм уларға тик уңыштар ғына вәғәҙәләй. Шуныһы шәп: шатлыҡлы хәлдәр бер ниндәй көс һалмайынса ла бер-бер артлы килеп сығып ҡына торор, имеш. Һәм уларҙың шойҡаны тотош йылға етер.

**Маймылдар** (1956, 1968, 1980, 1992, 2004, 2016) өсөн Ҡабан байтаҡ мөһим ваҡиғалар әҙерләй. Уларҙың ҡайһылары хатта яҙмыштарҙы хәл итерлек булыр. Маймылдар тормошонда уларҙы ҡурсалап, хәстәрләп тороусылар ҙа килеп сығыр. Яңы коллективтағы танышлыҡтар "эштәге романға" әйләнеп, аҙағы Мендельсон маршы менән тамамланыуы бик ихтимал.

**Әтәстәр** (1957, 1969, 1981, 1993, 2005, 2017) Ҡабанға дуҫ түгел. Әтәстең ҡупырыҡлығы һәм вайымһыҙ тормошо йыл хакимының йәнен көйҙөрә. Шуға күрә Әтәстәргә тамырынан үҙгәрештәргә ынтылмаҫҡа, ә тыныс ҡына үҙ ваҡытын көтөргә ҡала. Хатта ҡысҡырғанда ла һағыраҡ ҡыланығыҙ.

**Эт** (1958, 1970, 1982, 1994, 2006, 2018), идара итеү эстафетаһын Ҡабанға тапшырһа ла, уға ярҙам итеүҙән дә баш тармай. Йыл болотһоҙ ғына ла тормаҫ, ләкин Ҡабан күршеһенә ярҙам итергә әҙер генә торор һәм уны һөйәктең тәмлеләре менән генә һыйлар. Эттәргә шулай ҙа кемдәргәлер аҙау тештерен күрһәтеп алырға, ә кемдәр алдында ҡойроҡ болғарға кәрәклеген нығыраҡ үҙләштерергә тура килер.

**Ҡабан** (1947, 1959, 1971, 1983, 1995, 2007) фәҡәт үҙенә, үҙ мөмкинлектәренә һәм көслө яҡтарына ғына арҡалана алыр. Ә бындай сифаттары күп уның. Тимәк, уңышҡа юлдар асыҡ. Йыл хужаһы өсөн яңы тормош башлана, уның ниндәй булыры Ҡабандарҙың үҙҙәренә бәйле.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

### Шат күңеллелек сирҙән йолоп алыр

Хәҙер уйлағыҙ. Тимәк, эске шатлыҡ торошо материяға, йәғни мускулдарға, матдәләр алмашыныуына йоғонто яһай һәм кеше йәшәргәндәй була. Әйҙәгеҙ, тәжрибә үткәреп ҡарайыҡ. Көҙгө алдына баҫып, бәхетле кеше роленә инегеҙ, йылмайығыҙ, ҡаштарығыҙҙы күтәрегеҙ, һынығыҙҙы турайтығыҙ һәм бәхетле кеше кеүек тын алығыҙ. Ошо позала биш минут тороғоҙ. Ҡайҙан яҡшы кәйеф барлыҡҡа килгәненә, иң мөһиме - бер сәбәпһеҙ - аптырарһығыҙ. Һуңынан асыулы йөҙ булдырығыҙ, һынығыҙҙы үҙгәртегеҙ һәм хәтерегеҙҙә күптән инде онотолған ваҡиғалар уяныр, шул ваҡытта аңығыҙҙы томалаған асыу, күрә алмаусылыҡ ҡайҙан, нисек барлыҡҡа килгәнен дә аңламаҫһығыҙ.

Икенсе төрлө итеп әйткәндә, тышҡы торошоғоҙ эске донъяғыҙҙы сағылдыра. Шулай уҡ мимик мускулдарға йоғонто яһап, кире реакция, үҙебеҙгә кәрәкле торошто яһалма рәүештә тыуҙырырға мөмкин. Шуға күрә, әйҙәгеҙ, сәләмәт, бәхетле кеше ролен уйнайыҡ һәм бер аҙҙан ул һеҙҙең асылығыҙға әйләнер. Ысынбарлыҡта ниндәй булғығыҙ килә, эстән үҙегеҙҙе шулай тойоғоҙ. Тәнегеҙ һеҙгә буйһоноп, күҙ алдында үҙгәрәме? Быны эшләүе бик еңел, бары тик теләк кенә кәрәк. Һәр иртә тотош көнгә әҙерләнегеҙ: ҡулбаштарығыҙҙы яҙығыҙ, йылмайығыҙ, бер сәбәп булмаһа ла шатлыҡ торошон булдырығыҙ. Был гөнаһлы ерҙә бер минут йәшәүе лә шатлыҡ түгелме ни?

### "Маятник" күнегеүе: ваҡытҡа сәйәхәт

Башта үткәндәргә сәйәхәт ҡылайыҡ, һуңынан - киләсәккә. Күҙегеҙҙе йомоғоҙ. Бәхетһеҙ кеше торошон алығыҙ. Үҙегеҙҙе кинола икән тип хис итегеҙ. Залда ҡараңғылыҡ. Экранда әлегә бер нәмә лә юҡ, әммә һеҙ фильм ҡарарға килгәнлегегеҙҙе беләһегеҙ. Был фильм - һеҙҙең турала, һеҙҙең тормошоғоҙ тураһында, шуға нимә күрһәтәсәктәрен түҙемһеҙләнеп көтәһегеҙ. Иғтибарығыҙҙы үткәндәрҙәге күңелһеҙ хәлдәргә йүнәлтегеҙ. Һеҙҙе бер нисә тапҡыр ҡыйырһыттылар, алданылар, һаттылар, күпме ауырлыҡтар кисерелгән, нисек интеккәнһегеҙ...

Үҙегеҙҙе тормош юлындағы юлсы итеп күҙаллағыҙ. Уйығыҙҙа ғына артҡа боролоп ҡарағыҙ һәм ҡәҙерле булған бөтөн нәмәнең үткәндә ҡалғанын күҙаллағыҙ. Ә алда - билдәһеҙлек... Үҙегеҙҙе яңғыҙ, бәхетһеҙ, нимәгәлер дусар итеп тойоғоҙ... Экран яҡтыра башлай һәм һеҙ уға текәләһегеҙ. Асыҡ төҫмөрләнмәгән силуэттар пәйҙә була. Уларға иғтибарлап ҡарағыҙ, бәлки, берәйһен танырһығыҙ... Бала сағығыҙҙан, беренсе күңел ҡайтыуынан, нахаҡ ғәйептән хәтерләй башлағыҙ... Кемделер танығағыҙ, уйығыҙҙа ғына экранға инеп, ундағы ваҡиғаларҙа ҡатнашыусы булығыҙ. Был кеше кем, ул нимәләр һөйләй? Әгәр ул һеҙгә килгән икән, тимәк, был уға ла, һеҙгә лә кәрәк. Уны тыңлағыҙ, һөйләшегеҙ һәм нимә әйтеүҙе кәрәкле һанайһығыҙ, барыһын да әйтегеҙ һәм юлығыҙҙы артабан дауам итегеҙ. Һәр кемде тыңлағыҙ, һәр береһе менән, хатта таныш булмаһа ла, һөйләшегеҙ. Хатта ул кеше күптән был донъяны ташлап киткән булһа ла...

**С. КУЗИНА.**
**(Дауамы бар).**




**ҒИНУАР - ҺЫУЫҒАЙ**

| дш | шш | шр | кс | йм | шб | йш |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 |
| 7 | 8 | 9 | 10 | 11 | 12 | 13 |
| 14 | 15 | 16 | 17 | 18 | 19 | 20 |
| 21 | 22 | 23 | 24 | 25 | 26 | 27 |
| 28 | 29 | 30 | 31 | | | |

**ФЕВРАЛЬ - ШАҠАЙ**

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | 1 | 2 | 3 |
| 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 | 10 |
| 11 | 12 | 13 | 14 | 15 | 16 | 17 |
| 18 | 19 | 20 | 21 | 22 | 23 | 24 |
| 25 | 26 | 27 | 28 | | | |

**МАРТ - БУРАНАЙ**

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | 1 | 2 | 3 |
| 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 | 10 |
| 11 | 12 | 13 | 14 | 15 | 16 | 17 |
| 18 | 19 | 20 | 21 | 22 | 23 | 24 |
| 25 | 26 | 27 | 28 | 29 | 30 | 31 |

**АПРЕЛЬ - АЛАҒАРАЙ**

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 |
| 8 | 9 | 10 | 11 | 12 | 13 | 14 |
| 15 | 16 | 17 | 18 | 19 | 20 | 21 |
| 22 | 23 | 24 | 25 | 26 | 27 | 28 |
| 29 | 30 | | | | | |

**МАЙ - ҺАБАНАЙ**

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | 1 | 2 | 3 | 4 | 5 |
| 6 | 7 | 8 | 9 | 10 | 11 | 12 |
| 13 | 14 | 15 | 16 | 17 | 18 | 19 |
| 20 | 21 | 22 | 23 | 24 | 25 | 26 |
| 27 | 28 | 29 | 30 | 31 | | |

**ИЮНЬ - ҺӨТАЙ**

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | 1 | 2 |
| 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
| 10 | 11 | 12 | 13 | 14 | 15 | 16 |
| 17 | 18 | 19 | 20 | 21 | 22 | 23 |
| 24 | 25 | 26 | 27 | 28 | 29 | 30 |

**ИЮЛЬ - МАЙАЙ**

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 |
| 8 | 9 | 10 | 11 | 12 | 13 | 14 |
| 15 | 16 | 17 | 18 | 19 | 20 | 21 |
| 22 | 23 | 24 | 25 | 26 | 27 | 28 |
| 29 | 30 | 31 | | | | |

**АВГУСТ - УРАҒАЙ**

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | 1 | 2 | 3 | 4 |
| 5 | 6 | 7 | 8 | 9 | 10 | 11 |
| 12 | 13 | 14 | 15 | 16 | 17 | 18 |
| 19 | 20 | 21 | 22 | 23 | 24 | 25 |
| 26 | 27 | 28 | 29 | 30 | 31 | |

**СЕНТЯБРЬ - ҺАРЫСАЙ**

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | | 1 |
| 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 |
| 9 | 10 | 11 | 12 | 13 | 14 | 15 |
| 16 | 17 | 18 | 19 | 20 | 21 | 22 |
| 23 | 24 | 25 | 26 | 27 | 28 | 29 |
| 30 | | | | | | |

**ОКТЯБРЬ - ҠАРАСАЙ**

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 |
| 7 | 8 | 9 | 10 | 11 | 12 | 13 |
| 14 | 15 | 16 | 17 | 18 | 19 | 20 |
| 21 | 22 | 23 | 24 | 25 | 26 | 27 |
| 28 | 29 | 30 | 31 | | | |

**НОЯБРЬ - ҠЫРПАҒАЙ**

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | 1 | 2 | 3 |
| 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 | 10 |
| 11 | 12 | 13 | 14 | 15 | 16 | 17 |
| 18 | 19 | 20 | 21 | 22 | 23 | 24 |
| 25 | 26 | 27 | 28 | 29 | 30 | |

**ДЕКАБРЬ - АҠЪЮЛАЙ**

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | | 1 |
| 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 |
| 9 | 10 | 11 | 12 | 13 | 14 | 15 |
| 16 | 17 | 18 | 19 | 20 | 21 | 22 |
| 23 | 24 | 25 | 26 | 27 | 28 | 29 |
| 30 | 31 | | | | | |
| дш | шш | шр | кс | йм | шб | йш |

✓ *Кеше үҙен башҡаларҙан түбән йә өҫтөн тип тойған саҡта йәмғиәттә бер ниндәй ҙә тигеҙлек булмаясаҡ.*

*(Махатма Ганди).*

АФАРИН!

# ЙӨРӘК ҺҮҘЕН ӘЙТТЕ ДЫУАНДАР...

**Ошо көндәрҙә Дыуан районында тәүге тапҡыр яҡташыбыҙ Зөлфиә Ханнанованың шиғырҙарын яттан һөйләү буйынса конкурс уҙғарылды. Иртә таңдан шағирәнең тыуған ауылы Иҫке Хәлилгә районның барлыҡ башҡорт ауылдарынан ҡатнашыусылар ағылды. Райондың мәғариф бүлеге, Иҫке Хәлил мәктәбе һәм мәҙәниәт йорто ойошторған был сарала Дыуан районы башҡорттары ҡоролтайы һәм "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзаларының, шулай уҡ "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире Гөлфиә Янбаева менән шағирә Зөлфиә Ханнанованың да ҡатнашыуы байрамдың мәртәбәһен арттырҙы.**

Илленән ашыу бәйгесе араһынан иң-индәрҙе һайлап алыуы еңел булманы баһалама ағзаларына. Мәктәпкәсә йәштәге балалар араһында еңеүсе тип Әминә Шафиҡова билдәләнде (Мәсәғүт ауылы). 4-6-сы класс уҡыусылары араһында Гран-при яулаған Айгизә Ғәйфуллинаға (Әбдрәшит ауылы) етеүсе булманы. Шағирәнең "Мәскәү бесәйенә" исемле шиғырын бер кемде лә ҡабатламай, юғары оҫталыҡ менән башҡарҙы ул. 1-се урынға лайыҡ булыусы Мәсәғүт республика лицей-интернаты уҡыусыһы Илнара Баишева уҡып ишеттергән "Батырҙарҙың әйткәне..." шиғыры ла тетрәндерҙе тамашасыларҙы:

*"Торатауҙы яҡлай алмаһағыҙ,*
*Ер-һыуҙарҙы һаҡлай алмаһағыҙ,*
*Барыһы ла һеҙҙең намыҫта!*
*Барыһы ла һеҙҙең намыҫта..."*

Өлкәндәр араһында Гран-призы "Күрешергә һуҙ усынды..." шиғырын башҡарыусы Мәсәғүт гимназияһы уҡытыусыһы Айгөл Баишева яуланы. "Кот" поэмаһынан өҙөк башҡарған әсәле-ҡыҙлы Зарина һәм Регина Әхмәтғәлиналар (Арый ауылы), "Ауылым ағайҙары" шиғыры менән күңелдең иң нескә ҡылдарына ҡағылып үткән Гөлназ Мөхәмәҙиева (Иҫке Хәлил), "Инәйемде төштә күрҙем..." шиғырын башҡарып, бар залды илатҡан Зарема Низаметдиновалар ҙа (Әбдрәшит) еңеүселәр рәтен тулыландырҙы.

Шағирәнең үтенесе буйынса был конкурста үҙҙәре ижад иткән шиғырҙарҙы һөйләүселәр өсөн айырым номинация булдырылғайны. Өлкәндәр араһында Ҡәҙер ауылынан Гөлшат Ғарифуллинаның шиғри күстәнәсе күңелдәргә хуш килһә, мәктәп уҡыусылары араһында Иҫке Хәлил ҡыҙҙары Динара Исмәғилева менән Айназа Ямалова ҡыуандырҙы. 2-се класта ғына уҡыуына ҡарамаҫтан, Динара образлы фекерләүе, һүрәтләү алымдарын оҫта ҡулланыуы менән айырылып тора. 6-сы класс уҡыусыһы Айназа Ямалова иһә үҙ шиғырын Зөлфиә апаһына бағышланы:

*"Зөлфиә апай маяҡ беҙгә,*
*Зөлфиә апай терәк беҙгә,*
*Зөлфиә апай маҡсат беҙгә..."*

Боронғо башҡорт ауылы Иҫке Хәлилдә шиғриәт байрамы иртәнән алып кискә тиклем дауам итте. Төрлө ауылдарҙан йыйылған ағинәйҙәр ҡул эштәре һәм милли ризыҡтар күргәҙмәһе ойошторҙо, бауырһаҡ бешереү буйынса оҫталыҡ дәрестәре күрһәтте, сәхнәлә мөнәжәттәр йырлап ишеттерҙе, республиканың баш ағинәйе Гөлфиә Янбаева менән аралашып, киләсәктә башҡарыласаҡ эштәрҙе билдәләне.

Конкурста ҡатнашҡан һәр кешегә бүләк алып ҡайтҡан Зөлфиә Ханнанованың үҙен дә тыуған көнө менән алҡышлап, сәскәләргә күмде яҡташтары. Рухлы, иманлы шиғриәте менән Дыуан районы башҡорттарын ғына түгел, бар республика халҡын туплауға өлгәшкән шағирәнең дә яҡташтарына әйтер һүҙе шиғыр юлдары булып ағылды:

*Дыуанымда - һабантуйҙар,*
*Төрлө яҡҡа оса уйҙар.*
*Күңел күҙем таный барын:*
*Ана, минең Арыйҙарым!*
*Күрешергә һуҙыла ҡулдар:*
*Әпсәләмдәр, Мәрйәмғолдар,*
*Мөлкәттәр һәм Ҡаракүлдәр,*
*Йәнгә яҡын тағы кемдәр?*
*Иҫке Хәлил, Яңы Хәлил,*
*Һеҙҙе күрһәм, ярһый күңел,*
*Ҡайһығыҙ һуң йәндәремә*
*Яҡын түгел, ғәзиз түгел?*
*Ҡайҙаһығыҙ, Ҡәҙерҙәрем,*
*Минең йөрәк бәгерҙәрем,*
*Һеҙҙә нисек бара эштәр,*
*Һынатмаймы Әптерәштәр?*
*Мәсәғүттәр нисек йәшәй?*
*Кемдер бераү әйтһә әгәр*
*Һарт бөтә, тип, сәсәй-сәсәй...*
*Ышанмам мин һәм ашыҡмам*
*Ҡысҡырырға: "Ҡарауыл!"*
*Теҙләнмәй ул!*
*Ҡалҡып тора:*
*"Был - беҙ!" - тиеп, балҡып тора*
*Әй буйында ун ауыл!..*

- Районыбыҙҙа бик матур традиция йәшәп килә. Яҡташыбыҙ, Башҡортостандың халыҡ шағиры Тимер Йосоповтоң шиғырҙарын һөйләү буйынса тик егеттәр бәйге тота ине. Бына хәҙер ҡыҙҙар өсөн дә айырым конкурс булдырылды. Республикабыҙҙың Шәйехзада Бабич исемендәге премияһы лауреаты Зөлфиә Ханнанованың шиғырҙарын тик ҡыҙҙар ғына уҡыясаҡ. Был конкурстар матур йолаға әйләнер һәм районыбыҙҙан үҫеп сығасаҡ яңы таланттарға юл асыр, тип ышанабыҙ! - тине Дыуан районы мәғариф бүлеге методисы Илгенә Вәкил ҡыҙы Мөхәмәтова конкурсты йомғаҡлап. Ышаныстар аҡланһын, әйҙә.

**Рәмил МӨХӘМӘТЙӘНОВ.**



АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠАЙҒЫНЫ ЯҢҒЫҘ КҮТӘРҺӘҢ,

## шатлыҡты икәү күтәрергә кәрәк

Кеше үҙен башҡаларҙан түбән йә өҫтөн тип тойған саҡта йәмғиәттә бер ниндәй ҙә тигеҙлек булмаясаҡ.

**(Махатма Ганди).**

Мөхәббәттә ахмаҡлыҡ ҡылмаған кеше мөхәббәттә аҡыллы була алмаясаҡ.

**(Теодор Рейк).**

Ирҙәр тормошонда бер эпизод ҡына булған мөхәббәт ҡатын-ҡыҙ тормошонда тотош бер тарихты тәшкил итә.

**(Анна Луиза Сталь).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер саҡ кеше организмындағы йәшәү көстәре үҙ-ара бәхәсләшеп киткән һәм "Мин - иң яҡшыһы" тип ҡысҡырыша башлаған. Бәхәстең осона сыға алмағас, Аллаһыға килеп, уларҙың кемеһе иң яҡшы икәнен билдәләүҙе үтенгәндәр. Аллаһ: "Ҡайһығыҙ ташлап киткәндән һуң организм иң ҡыйын хәлдә ҡала, шул йәшәү көсө иң мөһиме була", - тигән. Иң тәүҙә Телмәр көсө организмды ташлап киткән. Бер йылдан яңынан ҡайтҡан һәм башҡаларҙан "Йә, минһеҙ нисек йәшәнегеҙ?" тип һораған. "Һөйләшмәгән телһеҙҙәр, әммә һулыш алыусылар, күҙ менән күреүселәр, ҡолаҡ менән ишетеүселәр, аҡыл менән фекер йөрөтөүселәр нисек йәшәһә, шулай йәшәнек", тигән йәшәү көстәре. Телмәр организмға ингәс, Күреү көсө организмдан киткән. Бер йылдан кире ҡайтҡан һәм "Йә, минһеҙ нисек йәшәнегеҙ?" тип һораған. "Күҙе күрмәгән һуҡырҙар, әммә һулыш алыусылар, теле менән һөйләшеүселәр, ҡолаҡ менән ишетеүселәр, аҡыл менән фекер йөрөтөүселәр нисек йәшәһә, шулай йәшәнек", тигән йәшәү көстәре. Күреү көсө организмға ҡайтҡас, Ишетеү көсө киткән. Бер йылдан кире ҡайтҡан һәм "Йә, минһеҙ нисек йәшәнегеҙ?" тип һораған. "Ишетмәгән һаңғырауҙар, әммә һулыш алыусылар, теле менән һөйләшеүселәр, аҡыл менән фекер йөрөтөүселәр нисек йәшәһә, шулай йәшәнек", тигән йәшәү көстәре. Шунан Аҡыл организмды ташлап киткән. Бер йылдан кире ҡайтҡан һәм "Йә, минһеҙ нисек йәшәнегеҙ?" тип һораған. "Аҡылы булмаған балалар, әммә һулыш алыусылар, теле менән һөйләшеүселәр, ҡолаҡ менән ишетеүселәр нисек йәшәһә, шулай йәшәнек", тигән йәшәү көстәре. Аҡыл ҡайтҡас, организмды Һулыш көсө ташларға йыйынған. Ләкин ул организмдан китергә ҡуҙғалғас, башҡа йәшәү көстәре быулыға һәм Һулыш көсө артынан ҡутарылып сыға башлаған. Шунда улар дөйөм йорттары организмда иң мөһиме Һулыш көсө икәнен аңлаған һәм уға:"Һин - иң яҡшыһы. Беҙҙең батшабыҙ бул. Китмә!" тип, уның өҫтөнлөгөн танырға мәжбүр булған..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

"Башҡортостан нәшриәте" дәүләт унитар предприятиеһы типографияһында баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13)

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты -
29 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары –
**50665, 50673**

Тиражы - 4077
Заказ - 1428